1.Бирелгән һүҙҙәрҙе тура һәм күсмә мәғәнәләрҙә алып, һүҙбәйләнештәр яҙығыҙ.

*Бөркөт, туң, үткер, алтын, арыҫлан, ҡара.*

2.Түбәндәге һүҙҙәр омонимдарҙың ниндәй төркөмөнә ҡарай? Уларҙың мәғәнәһен һүҙбәйләнештәр йәки башҡа һүҙҙәр ярҙамында аңлатығыҙ.

*Йәш (нисә йәштә) – йәш (күҙ йәше), йәш (исем) – йәш (сифат: йәш кеше), йәйен (балыҡ) – йәйен (рәүеш: йәй көнө), уҡыус'ыбыҙ – уҡыусыб'ыҙ (баҫымға иғтибар итегеҙ), ҡаҙаҡ (сөй) – ҡаҙаҡ (элекке үлсәү берәмеге), тире (тәндең тышҡы ҡатламы) – тире (тыныш билдәһе).*

3.Түбәндәге мәғәнәләрҙә йөрөгән фразеологизмдарҙы яҙығыҙ.

*Ҡасты, уға барыбер (иҫе китмәй), алдау, ыҙалау, әҙ генә.*

4.Бирелгән һүҙҙәрҙең синонимик рәтен яҙып, доминантаһын күрһәтегеҙ.

*Йәштәш, тукланыу, әүәле, тиҙ, түбәһе күккә тейеү.*

5.Күрһәтелгән һүҙҙәргә лексик анализ эшләгеҙ: *<u>алтын</u> күҙ, ғүмер, аршин.*

## II вариант

1. Түбәндәге һүҙҙәр иҫкергән һүҙҙәрҙең ҡайһы төркөмөнә ҡарай? Айырып яҙығыҙ.

*Тархан, уҡ-һаҙаҡ, сиреү (ғәскәр), ыу (ағыу), мыҫҡал, аршын (үлсәү берәмеге), ейеү (ашау), стражник, йөҙ башы, нотоҡ (телмәр), мәркәз (үҙәк), яһаҡ, тәфтиш (тикшереү).*

2. «Ер»һүҙен төрлө мәғәнәлә ҡулланып, ҙур булмаған 3-4 һөйләм яҙығыҙ. Мәғәнәләрен берәр һүҙ менән генә әйтегеҙ.

3. Бирелгән фразеологизмдарға антоним булған фразеологик берәмектәр яҙығыҙ һәм мәғәнәләрен берәр һүҙ менән генә аңлатығыҙ.

*Түбәһе күккә тейгән - ... , эт тубығынан -... , аяғы ергә теймәй - ... , ҡулға төшөрөү -* ....

4. Түбәндә бирелгән ике төркөм һүҙҙәр араһында ниндәй айырма бар? Улар ниндәй һүҙҙәр?

а) *тыу (байраҡ), ейеү (ашау), ғәреп (көнсығыш), солох (тыныслыҡ), йәҙүәл (таблица), шәкел (форма);*

б) *волость, барымта, әсмүхә, айбалта, өйәҙ, комсомол.*

5. Күрһәтелгән һүҙҙәргә лексик анализ эшләгеҙ: *кантон, ҡуян йөрәк, ғәйәт, кирбес.*

## III вариант

1. Лексик һәм лексик-грамматик омонимдарға икешәр миҫал яҙығыҙ (һүҙбәйләнеш составында бирегеҙ).

2. Күрһәтелгән һүҙҙәрҙең ҡайһыһы тура, ҡайһыһы күсмә мәғәнәлә ҡулланылған? Мәғәнә күсеү нимәгә нигеҙләнгән? Күпмәғәнәлелектең ниндәй төрөнә ҡарай?

*Элек бында <u>алтын</u> приискыһы булған.*

*Мул уңыш менән <u>алтын</u> көҙ килде.*

3. Бирелгән һүҙҙәрҙе килеп сығышы буйынса төркөмләп яҙығыҙ.

*Ат, хәнйәр, майҙан, эскәмйә, самауыр, ғилми, ҡәләм, фән, трактор, дүшәмбе, комсомол, йәйәү, бала, бер, мәғариф, колхоз, биҙрә, китап, диләнкә, баҙар, иғлан, егерме, ҡаршы, логика, опера.*

4. Ҡулланылыш сфераһы буйынса лексика ниндәй ҡатламдарға бүленә? Уларҙың төрҙәрен әйтегеҙ.

5. «Иғлан» һүҙенә лексик анализ яһағыҙ.

## IV вариант

1. Күрһәтелгән һүҙгә лексик анализ эшләгеҙ:

*Приискыла ғына түгел, ауыл <u>батрактары</u> араһында ла ризаһыҙлыҡ көсәйҙе.(*Я.Хамматов).

2. Түбәндә күрһәтелгән һүҙҙәр үҙ-ара ниндәй һүҙҙәр була? Ни өсөн?

*Тормош аҡты яңы <u>йырын</u> йырып,*
*Киң туғайҙар тыуҙы яңынан.* (Т.Йәнәби).

*Буранбайҙың <u>йырын</u> тыңлағанда*
*Йөрәкһенә илдең ирҙәре.* (Халыҡ йыры).

3. Түбәндә бирелгән һүҙҙәр лексиканың ниндәй ҡатламына ҡарай? Ни өсөн? Уларҙы ниндәй ике төркөмгә айырып ҡарап була?

*Ейеү (ашау), кантон, аршын, кенәз, инсан (кеше), ут (үлән), яһаҡ, мыҫҡал, мөғәллим, йәҙүәл (таблица), солох, тархан, мәркәз (үҙәк).*

4. Антоним фразеологик берәмектәргә бер нисә миҫал яҙығыҙ.
5. Нимә ул метафора? Һүҙбәйләнеш формаһында икешәр миҫал яҙығыҙ.

## «Фонетика» буйынса контроль эштәр

### I вариант

1. **Б, п, v, м** өндәре ниндәй артикуляцион билдәләре (яһалыу урыны, яһалыу рәүеше, тауыш һәм шау ҡатнашлығы) буйынса оҡшаш, ә ҡайһы билдәләре буйынса айырылалар?

2. Түбәндәге һөйләмдәрҙә һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең элизияһын күрһәтегеҙ.

*Йүгереп барып ултырып та китте, күрә алмай ҡалдым. «Көтөүҙәге ҡара айғырҙы тотоп бир», - тигән ҡарт улына.*

3. **Ҡ, к** өндәренең **ғ, г** өндәре менән сиратлашыу осраҡтарына миҫалдар яҙығыҙ.

4. Түбәндәге тексты дөрөҫ әйтелеш нормаларын күрһәтеп яҙығыҙ (фонетик транскрипция менән бирегеҙ).

*Сходка Ныязғол староста, арҡыры баҫып, ҡайҡая биреп, алдан китте. Халыҡ йыйылып бөткәс, Айбулат менән Зөфәр ҙә килеп инделәр. Сходты Ныязғол үҙе башланы. Ул Айбулаттың ҡайтҡанын ишетмәгәйне әле. Әле уның бында килеп инеүенә лә, ҡайтҡас үҙенә барып күренмәүенә лә бик асыуы ҡабарҙы, ләкин ул сер бирергә теләмәне. Хәбәрен һөйләп бөткәс, Ныязғол урынына кире барып ултырҙы. (*Һ.Дәүләтшина).

### II вариант

1. Түбәндәге һүҙҙәрҙе, баҫымдарын ҡуйып, күсереп яҙығыҙ.

*Айыуҙай, шундай, ағастыр, бараһыңдыр, беҙҙеңсә, ауылғаса, ҡыҙылса, уртаса, үрәсә, уҡығыҙ, эшләгеҙ, уҡымағыҙ, эшләмәгеҙ, уҡыйҙар, уҡыйбыҙ, уҡыйһың, уҡыны, уҡыманы, алдыңмы, алаһығыҙмы, алалармы.*

2. Бирелгән һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе транскрипциялағыҙ, һуҙынҡы өндәрҙең редукцияһын, элизияһын, протеза һәм эпентеза күренештәрен билдәләгеҙ.

*Ологайыу, бара алманы, ҡоро утын яҡ, ҡарышлауыҡ, килергә итә, төрлө әйберҙәр, ыҫмала, эскәмйә, бүрәнә, торба, Ҡаризел, яҡшы кеше ине, айырыуса, кейемеңде сөйгә эл.*

3. Түбәндәге һүҙҙәргә фонетик анализ эшләгеҙ. Уларҙа ниндәй фонетик күренештәр бар? Аңлатығыҙ: *кутәренке, ике ҡабат.*

4. Тел арты тартынҡыларын күрһәтеп, уларҙың ҡалған артикуляцион билдәләрен (яһалыу рәүеше, тауыш һәм шау ҡатнашлығы) әйтегеҙ.

## «Һүҙҙең морфематик төҙөлөшө» һәм «Һүҙ яһалыу юлдары»
## темалары буйынса контроль эштәр

### I вариант

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфематик анализ эшләгеҙ.

*<u>Уңыштар</u> артисткаға ҙур <u>танылыу</u> килтерҙе, ижады юғары <u>баһаланды.</u>*

2. Һүҙҙәрҙең тамырын һәм нигеҙен билдәләгеҙ.

*Алдаҡ, алдыҡ, алһаҡ, аҡһаҡ, ағарыу, аҡһымдың, берләшегеҙ, беренселекте, беләһеңме, етенсеһенә.*

3. Бирелгән һүҙҙәр яһалышы буйынса ниндәй һүҙҙәр? Улар һүҙьяһалыштың ниндәй төрөнә ҡарай?

*Урынлашҡан, арымай-талмай, әҙ-мәҙ, ҡараҫҡы, аяҡ өҫтө, айыу көпшәһе, хәтерләйбеҙ, өсмөйөш, алтмыш.*

4. Бирелгән һүҙҙәргә һүҙ яһаусы, форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар ҡушығыҙ: *урман, һалҡын, туҙ, бер, ауыл, һаҡ, яҡшы.*

5. Түбәндәге тамыр һүҙҙәргә һүҙ яһаусы аффикстар ҡушып, тамырҙаш һүҙҙәр яһағыҙ: *оҫта, күр, баш, яй, бел, аҡ.*

**II вариант**

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфематик анализ эшләгеҙ.

*Батыр <u>үлемдәнҡурҡмаҫ</u>. <u>Киләсәгеңде</u> уйла.*

2. Һүҙҙәрҙең тамырын һәм нигеҙен билдәләгеҙ.

*Эшсәндәр, һиҙгерлекте, ҡыҫҡаса, биҙәк, иләккә, йәйләү, йәйәүләп, етешмәй, етен, етенсе.*

3. Бирелгән һүҙҙәр яһалышы буйынса ниндәй һүҙҙәр? Улар һүҙьяһалыштың ниндәй төрөнә ҡарай?

*Ярғанат, белешмә, ҡыҙғылт, дуҫ-иш, баш мәҡәлә, барасаҡбыҙ, үҙйөрөшлө, ҡолаҡ һалыу, биш-алты.*

4. Бирелгән һүҙҙәргә һүҙ яһаусы, форма яһаусы һәм үҙгәртеүсе аффикстар ҡушығыҙ: *Йөк, дым, баҡса, хеҙмәт, кил, матур, бер, яй.*

5. Түбәндәге һүҙҙәргә икешәр тамырҙаш һүҙҙәр яҙығыҙ: *коткар, һаҡ, гәм, тынғыһыҙ, йәшәрҙе, күр, башлаһа, күңел.*

**III вариант**

1. Түбәндәге һүҙҙәрҙе яһаусы нигеҙ итеп, ҡылымдар яһағыҙ (һәр төркөмгә айырым аффикс).

а) *баш-, уй-, ҡыштыр-*;

б) *дәрт-, ҡул-;*

в) *иҫән-, бер-, дуҫ-;*

г) *һан-, уйын-, аш-;*

д) *ҡарт-, шәп-, һары-.*

2. Түбәндәге һүҙҙәрҙең яһалыу ҡалыбын аңлатығыҙ һәм шул ҡалыптар менән яһалған тағы ла икешәр һүҙ яҙығыҙ.

а) *аш – аша, йәш–йәшә;*

б) *һал–һалым, өй (өйөү) –өйөм.*

3. Бирелгән һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшөн билдәләгеҙ.

*Үҫемлектәре, гүзәллеге, йәшкелтерәк, йөрөштөрөгөҙ, юғалтһағыҙ, өләсәйемдең, балаҡайҙарыма, уңайһыҙланма, беренселекте.*

4. Бирелгән һүҙҙәрҙең һәр береһенән төрлөһүҙ төркөмөнә ҡараған тамырҙаш һүҙҙәр яһағыҙ: *күңел, ет, уң, бел, юҡ.*

5. Бирелгән һүҙҙәр яһалышы буйынса ниндәй һүҙҙәр, уларҙың яһалыу ысулын әйтегеҙ: *терегөмөш, яңылыҡ, йәшелләнде, бата-сума, һис ҡайҙа, отҡор, һыу аҫты кәмәһе, ҡышын, ошолай.*

**IV вариант**

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфематик анализ эшләгеҙ.

*<u>Уйламағандан</u> килеп сыҡты. <u>Яҡшылығыңды</u> күп <u>күрҙек</u>.*

2. Тамыр һәм яһалма һүҙҙәрҙе айырып яҙығыҙ; яһалма һүҙҙәрҙең яһаусы нигеҙен күрһәтегеҙ: *күңелең, баҫымды, тынысланды, тыныс, килдек, ебәрҙеләр, дәртләнһә, тиҙерәк, күңелһеҙлектән, тартмаһы.*

3. Һүҙ яһаусы, форма яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар ҡушырға: *фекер, уйла, биш, түҙ, яҡшы, белем, күр, тиҙ.*

4. Күрһәтелгән һүҙҙәргә һүҙьяһалыш буйынса анализ эшләгеҙ.

*<u>Быраулаусыларға</u> китте. Бер аҙ <u>тынысланды</u>.*

5. Бирелгән һүҙҙәрҙең һәр береһенән төрлө һүҙ төркөмөнә ҡараған ике-өс тамырҙаш һүҙҙәр яһағыҙ: *оҙон, бороу, йомшарыу, көс.*

**«Морфология» бүлегебуйынса контроль эштәр**

**I вариант**

1. Күрһәтелгән исемдәргә морфологик анализ яһарға, һүҙ составын билдәләргә.

*Мин әле өйҙәмен, ә ул һеҙҙең янығыҙға киткәйне. Яҙмаларыңдың барыһы ла теүәлме? Полк штабында дошмандың һөжүмен көтәләр.*

2.«Еңеү» һүҙен эйәлек категорияһының I зат күплек формаһында килеш менән үҙгәртергә.

3.«Хат» исемен күплектә алып, бер юлы эйәлек категорияһының II зат берлек формаһы һәм төбәү килеш ялғауҙары ҡушып, һөйләм яҙығыҙ.

4.«Баҫыу» исеме менән ике һүҙбәйләнеш яҙырға: береһендә ул – эйәлек килештә, ә икенсеһендә эйәлек категорияһының III заты формаһында булһын.

5. Түбәндәге һүҙҙәрҙе яһаусы нигеҙ итеп, исемдәр яһағыҙ. Исем яһаусы аффикстарҙы күрһәтегеҙ.

*Бел, тот, матур, яр (ярыу), йыш, сер, ағас, төйөн.*

**II вариант**

1. Күрһәтелгән исемдәргә морфологик анализ яһарға, һүҙ составын билдәләргә.

*Мин үҙем мәктәп укытыусыһымын. Иптәштәрем менән ағас күләгәһендә һөйләшепултырабыҙ. Ышанысығыҙҙы акლармын.*

2. «Хеҙмәттәш» исемен эйәлек категорияһының III затында алып, I зат хәбәрлек ялғауы өҫтәргә һәм һөйләм яҙырға.

3. Урыҫса «Я твой земляк», «Я ваш земляк» тигән һөйләмдәрҙе башҡортса берәр һүҙ менән генә бирегеҙ. Ниндәй категория ялғауҙары ҡуштығыҙ?

4. Бирелгән исемдәрҙе яһалышы буйынса төркөмләгеҙ, яһаусы нигеҙен билдәләгеҙ.

*Сабынлык, ялғау, ыуылдырык, төшөнсә, ҡулъяулык, профсоюз, тимер-томор, ағай-эне, тәүтормош, балғалаҡ, көрәк, йәйләү, етен, уйын, таяҡ.*

5. «Белем» һүҙен эйәлек категорияһының II зат күплек формаһында килеш менән үҙгәртергә.

**III вариант**

1. Күрһәтелгән исемдәргә морфологик анализ яһарға, һүҙ составын билдәләргә.

*Якшылығыңды күп күрҙем. Мин Хәсәндең ҡустыһымын.Якташтарығыҙҙан сәләм. Иптәштәренең ышынысын акланымы?*

2. «Тауыш» һүҙен эйәлек категорияһының III заты формаһында килеш менән үҙгәртегеҙ, килеш ялғауҙарын күрһәтегеҙ.

3. «Уй» һүҙенә бер юлы күплек, эйәлек категорияһының I затының күплек формаһы һәм эйәлек килеш ялғауҙары ҡушып, һөйләм төҙөгөҙ.

4. Түбәндәге һөйләмдәрҙә «укытыусыбыҙ» һүҙе ниндәй грамматик формаларҙа тора? Баҫымын ҡуйығыҙ.

*Сәлимә апай беҙҙең яраткан укытыусыбыҙ.*

*Беҙ икебеҙ ҙә укытыусыбыҙ.*

5. Тамыр ҡылымдарҙан *-ғыс/-гес, -к/-ҡ, -ке/-ҡы, -ма/-мә, -ым/-ем* аффикстары ярҙамында исемдәр яһағыҙ.

**IV вариант**

1. Күрһәтелгән исемдәргә морфологик анализ яһарға, һүҙ составын билдәләргә.

*Әле бөтәбеҙ ҙә эштәбеҙ.Халкыбыҙҙың тарихы бай. Мин Ырғыҙ буйы башкортомон. Тәкдимдәрегеҙҙе комиссия ултырышында ҡарарбыҙ.*

2. Бер яһалма исемде күплектә алып, эйәлек категорияһының II зат берлегендә килеш менән үҙгәртегеҙ.

3. «Класташ» һүҙен бер юлы эйәлек категорияһының III заты, ә хәбәрлек категорияһының I зат берлек формаһында алып, һөйләм төҙөгөҙ.

4. Ике һүҙҙе ҡушыу һәм парлау юлы менән яһалған исемдәргә миҫал яҙығыҙ.

5. Түбәндәге һөйләмдәрҙә «иптәшебеҙ» һүҙенең ниндәй грамматик формаларҙа тороуын һәм функцияһын билдәләгеҙ. Аффикстарын күрһәтегеҙ.

*Иптәшебеҙ ҡайҙалыр тороп ҡалды. Беҙ уның иптәшебеҙ.*

## «Сифат», «Һан», «Рәүеш», «Алмаш» темалары буйынса контроль эштәр

### I вариант

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ яһарға, һүҙ составын билдәләргә.

*Күп <u>тә</u> үтмәне, <u>ҡайҙандыр</u> ҡалҡып сығып өлгөргән <u>ваҡ</u> болоттар, бергә ҡушылып, ер тетрәтергә, <u>уттарын</u> сәсергә тотондолар.* (И. Насыри).

2. Бер ҡушма һан алып, унан мөмкин тиклем төрлө юл менән яһалған сама һандары яҙығыҙ.

3. Ике төп (хәл) һәм ике ваҡыт рәүеше алып, уларҙың дәрәжә формаларын яҙығыҙ, бер-икеһе менән һүҙбәйләнеш төҙөгөҙ.

4. «Туғандар» һүҙен эйәлек категорияһының берлек һәм күплек формаларында үҙгәртергә.

5. Сифат урынында ҡулланылыусы күрһәтеү алмаштары менән ике һөйләм яҙығыҙ.

### II вариант

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ эшләгеҙ.

*Беҙҙең быуын өсөн Ватан тағы <u>шуғаикеләтә</u> ғәзиз: уның именлеге <u>өсөн</u> күп атайҙар менән ағайҙар <u>ғүмерҙәрен</u> бирҙеләр.* (М.Кәрим).

2. Бер сама һаны менән ҡушма уртаҡлыҡ исемдән һүҙбәйләнеш төҙөп, килеш менән үҙгәртегеҙ.

3. Эйәлек категорияһының III зат формаһындағы бер һорау алмашын эйәлек һәм төбәү килештәрҙә алып, берәр һөйләм яҙығыҙ.

4. Тамыр, яһалма һәм парлы рәүештәргә икешәр миҫал яҙып, уларҙың ниндәй мәғәнәүи төркөмгә ҡарағанлығын әйтегеҙ, берәүһенең дәрәжә формаларын бирегеҙ.

5. Коллектив (төркөмлө) күплекте аңлатыусы исем менән һөйләм яҙығыҙ.

### III вариант

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ эшләгеҙ.

*<u>Нисектеркыҙыңдың</u> исеме,*
*Белмәйем, ҡорҙаш, уны;*
*<u>Тик</u> беләм: ул - алма битле,*
*<u>Һәмбикбәләкәй</u> ҡулы.*(Р.Ниғмәти).

2. Предметтың, хәл – күренештең билдәле бер урынға һәм ваҡытҡа ҡарағанлығын белдереүсе икешәр сифат яҙығыҙ. Уларҙың ниндәй сифат икәнен әйтегеҙ.

3. Төрлө юл менән яһалған 3 юҡлыҡ алмашы яҙығыҙ, береһен килеш менән үҙгәртегеҙ.

4. Нумератив һүҙҙәр менән биш һүҙбәйләнеш яҙығыҙ.

5. «Ҡәнәғәт» һүҙен хәбәрлек категорияһының зат формаларында яҙығыҙ, береһе менән һөйләм төҙөгөҙ.

### IV вариант

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ эшләгеҙ.

*Күҙ <u>ҡараштарындауҡ</u> баҫалҡы аҡыллылыҡ, <u>ниндәйҙеряғымлы</u> йылылыҡ <u>һәм</u> ҡыйыулыҡ, <u>рухи</u> көс бөркөлөп тора.* (С.Әлибаев).

2. *–ғыс/-гес, -ҡыс/-кес, -ғос/-гөс* аффикстарының береһе менән яһалған икешәр исем һәм сифат яҙығыҙ. Исемде күплектә алып, эйәлек категорияһының I зат күплек формаһына ҡуйығыҙ.

3. Ике оҡшатыу рәүеше алып, һүҙбәйләнештәр яҙығыҙ.

4. Алыҫтағы нәмәгә ҡарата ҡулланыла торған ике күрһәтеү алмашы яҙып, килеш менән үҙгәртегеҙ.

5. Бер яһалма сифатты артыҡлыҡ дәрәжәһенең төрлө бирелеү формаларында яҙығыҙ.

## «Ҡылым» темаһы буйынса контроль эштәр

### I. Ҡылымдың дөйөм лексик-грамматик категориялары һәм һөйкәлеш формалары

#### I вариант

1. Түбәндә бирелгән һүҙҙәрҙең һәр береһенән төрлө аффикстар менән яһалған икешәр ҡылым яҙығыҙ һәм ҡылым яһаусы аффиксты күрһәтегеҙ.

*Ҡуйы, кер, бер, моң, ҡат, аҡ.*

2. Ҡылымдың ниндәй категориялары уның даими билдәләре тип йөрөтөлә һәм ни өсөн?

3. Күрһәтелгән ҡылымдарға морфологик анализ эшләгеҙ, морфемаларын билдәләгеҙ.

*Кешеләрҙән дә <u>һорашҡыланылар</u>. Тик бирәүгә лә <u>һиҙҙермәһендәр.</u>*

4. «Осрау» ҡылымын уртаҡлыҡ йүнәлешендә алып, шарт һөйкәлешенең II зат күплек формаһында яҙығыҙ. Һөйләм төҙөгөҙ.

5. «Эшләү» ҡылымын ниәт һөйкәлешенең аналитик формаһында алып, хәҙерге заманда зат-һан менән үҙгәртегеҙ.

#### II вариант

1. Күрһәтелгән ҡылымдарға морфологик анализ эшләгеҙ, морфемаларын билдәләгеҙ.

*Барып бер аҙ <u>ярҙамлашмаҡсы булдыҡ</u>. Шуға <u>әйтештерһәгеҙ</u> ни була?*

2. «Килә» ҡылымын йөкмәтеү йүнәлешендә алып, бойороҡ һөйкәлешенең II зат күплегендә юҡлыҡ формаһында яҙығыҙ һәм һөйләм төҙөгөҙ.

3. «Өлгөрөү» ҡылымын билдәле киләсәк заманда зат-һан менән үҙгәртегеҙ. Заман һәм зат-һан аффикстарын билдәләгеҙ.

4. Түбәндәге һөйләмдә ҡылымдарҙың ниндәй йүнәлештә тороуын әйтеп, аффиксын күрһәтегеҙ һәм, уларҙы төп йүнәлештә алып, һөйләмде үҙгәртеп яҙығыҙ.

*Ул баҡса <u>туҙҙырылған</u>, ағастары <u>ҡырҡылып бөткән</u>.*

5. «Күрһәтеү» ҡылымын ниәт һөйкәлешенең ябай һәм ҡушма формаларында яҙығыҙ.

#### III вариант

1. Күрһәтелгән ҡылымдарға морфологик анализ эшләгеҙ, морфемаларын билдәләгеҙ.

*Тағы ла бер аҙ <u>эшләңкерәмәксебеҙ</u> әле. Тәнҡитте дөрөҫ ҡабул итмәйһең, <u>һүҙ күтәрмәйһең.</u>*

2. «Киң» сифатынан яһалған ҡылымды йөкмәтеү йүнәлешендә алып, билдәһеҙ киләсәк замандың III зат күплегендә яҙығыҙ һәм һөйләм төҙөгөҙ.

3. «Һөйләү» ҡылымының ҡайтым йүнәлеше формаһын шарт һөйкәлешендә зат-һан менән үҙгәртегеҙ.

4. Бирелгән ҡушма ҡылымдарҙы шуларға тап килгән (синонимдары булған) яһалма ҡылымдар менән алмаштырығыҙ.

*Ярҙам итә, юҡ булды, ҡүҙ-ҡолаҡ булып торуғыҙ, фаш ителде, сит кешене ят итеү, бик ҡәнәғәт булды.*

5. Хәбәр һөйкәлешенең мөнәсәбәтле үткән заман формаларын әйтегеҙ.

### IV вариант

1. Күрһәтелгән ҡылымдарға морфологик анализ эшләгеҙ, морфемаларын билдәләгеҙ.

*Былай булырын белһәк, әлбиттә, __йәһәтләгән булыр инек__. Уны ниңәлер __асыуландырғанһығыҙ.__*

2. «Күреү» ҡылымын теләк һөйкәлешенең аналитик формаһында алып, хәҙерге заманда зат-һан менән үҙгәртегеҙ һәм һөйләм төҙөгөҙ.

3. «Эшләү» ҡылымын уртаҡлыҡ йүнәлешендә алып, билдәле күптән үткән замандың берәй формаһында яҙығыҙ һәм һөйләм төҙөгөҙ.

4. «Аш», «ҡан», «һан», «уйын», «төйөн» исемдәренән бер үк аффикстар менән ҡылымдар яһағыҙ.

5. Ниндәй йүнәлеш формаһында күсемле ҡылымдар күсемһеҙгә әйләнә? Бер-нисә миҫал менән күрһәтегеҙ.

## II. Ҡылым һөйкәлештәре һәм ҡылым төркөмсәләре

### I вариант

1. Түбәндәге ҡылым формаларына морфологик анализ эшләгеҙ, категорияларының аффикстарын күрһәтә барығыҙ.

*Улар __уйламағанданосрашып__, бер-берейен __таныуға шатланыштылар__.*

2. «Яҙ» ҡылымын үткән, хәҙерге һәм киләсәк заман сифат ҡылым формаларында алып, һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ.

3. «Һорау» ҡылымын уртаҡлыҡ йүнәлешендә алып, хәҙерге заман хәбәр һөйкәлешендә зат-һан менән үҙгәртегеҙ.

4. Һөйләмдәр яҙығыҙ:

а) уртаҡ ҡылым хәбәр составында килһен;

б) хәл ҡылым ваҡыт хәле булһын.

5. Берәй хәҙерге заман сифат ҡылымға бер юлы күплек һәм төбәү килеш ялғауҙары ҡушып, һөйләм төҙөгөҙ.

### II вариант

1. Һөйләмдәге ҡылым формаларына морфологик анализ эшләгеҙ, категорияларының аффикстарын күрһәтә барығыҙ.

*Сөнәгәттең __ҡайтҡанын__ ишетеп, уны __күрергә__ иптәштәре __йыйылды.__*

2. «Белеү» ҡылымының теләк һөйкәлеше формаһын билдәле үткән заманда зат-һан менән үҙгәртегеҙ.

3. Йөкмәтеү йүнәлешендәге ҡылымды исем ҡылым формаһында алып, төбәү килештә яҙығыҙ һәм һөйләм төҙөгөҙ.

4. Һөйләмдәр яҙығыҙ:

а) хәл ҡылым рәүеш хәле булып килһен;

б) шарт һөйкәлеше эйәрсән һөйләмдең хәбәре булып килһен.

5. Бер үткән заман сифат ҡылымға бер юлы эйәлек категорияһының III заты һәм төшөм килеш ялғауҙары ҡушып, һөйләм яҙығыҙ.

### III вариант

1. Һөйләмдә бирелгән ҡылымдарға морфологик анализ эшләгеҙ, категорияларының аффикстарын күрһәтегеҙ.

*Япраҡтары __ҡойолған__ ағастар __һирәгәйә__ төшкәндәй тойолдолар. – Кискә ҡайҙа __бармаҡсыһығыҙ?__*

2. «Осрашыу» ҡылымын хәл ҡылымдың бөтә формаларында алып, һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ.

3. Уртаҡлыҡ йүнәлешендәге бер ҡылымды шарт һөйкәлешенең юҡлыҡ формаһында алып, зат-һан менән үҙгәртегеҙ.

4. Һөйләмдәр яҙығыҙ:

а) йөкмәтеү йүнәлешендәге исем ҡылым тултырыусы булып килһен; уға исемгә хас ниндәй ялғауҙар ҡушылған?

б) киләсәк заман сифат ҡылым аныҡлаусы булып килһен.

5. «Әйт», «кил», «йөрө», «көл» ҡылымдарына төрлө мәғәнә биҙәге биреүсе күләм аффикстары ҡушығыҙ.

### IV вариант

1. Күрһәтелгән ҡылымдарға морфологик анализ эшләгеҙ, уларҙың морфемаларын билдәләгеҙ.

*Улар <u>шаулашып</u>, яңы <u>төҙөлгән</u> клубҡа <u>килһәләр</u>, унда әле берәүҙе лә <u>индермәйҙәр</u> икән.*

2. «Өйрәтеү» ҡылымына эш-хәрәкәтте артығыраҡ башҡарыу күләме аффиксын ҡушып, бойороҡ һөйкәлешенең III зат күплек формаһында яҙығыҙ һәм һөйләм төҙөгөҙ.

3. Хәл ҡылым формалары менән ике һөйләм яҙығыҙ: береһендә ул – ваҡыт хәле, икенсеһендә рәүеш хәле булһын.

4. «Йөрө» ҡылымының йөкмәтеү йүнәлеше формаһын исем ҡылым итеп алып, килеш менән үҙгәртегеҙ.

5. *-ған/-гән* аффикслы ҡылым менән ике һөйләм яҙығыҙ: береһендә ул - хәбәр һөйкәлеше, икенсеһендә – сифат ҡылым булһын. Уларҙың грамматик формаһын, һөйләмдәге функцияһын әйтегеҙ.

## «Синтаксис» буйынса контроль эштәр

### I. «Һүҙбәйләнеш» темаһы буйынса контроль эштәр

### I вариант

1. Һөйләмдәге һүҙбәйләнештәрҙе айырып алып, эйәртеүсе һүҙен билдәләгеҙ, һорау ҡуйығыҙ, уларҙың компоненттары араһындағы мәғәнәүи һәм грамматик бәйләнеш төрҙәрен күрһәтегеҙ.

*Ныяҙғол Тимерғәленең был һүҙҙәренән тәрән уйға төштө.* (Ж.Кейекбаев).

2. Һөйкәлеү һәм башҡарылыу һүҙбәйләнештәрен күсереп алып, эйәртеүсе һүҙен билдәләгеҙ, мәғәнәүи төрөн әйтегеҙ.

*Әгәр ҙә листовкаларҙы кемдән алыуығыҙҙы әйтһәгеҙ, суд үлем язаһынан ҡотҡарыр.*

3. Бирелгән һүҙҙәрҙе индереп, йәнәшәлек һүҙбәйләнештәре төҙөгөҙ,эйәртеүсе һүҙен күрһәтегеҙ, мәғәнәүи төрөн әйтегеҙ.

*Ҡыуаныу, ваҡиға, оҙаҡ, күрмәгән, ҡапыл, таныш.*

4. Түбәндәге һүҙҙәрҙе эйәртеүсе һүҙҙәр итеп, башҡарылыу һүҙбәйләнештәре яһағыҙ,һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәүи төрөн әйтегеҙ.

*Рәхмәт, яҡын, китте, осрашманыҡ, ҙурыраҡ.*

### II вариант

1. Һөйләмдәге һүҙбәйләнештәрҙе айырып алып, эйәртеүсе һүҙен билдәләгеҙ, һорау ҡуйығыҙ, уларҙың компоненттары араһындағы мәғәнәүи һәм грамматик бәйләнеш төрҙәрен күрһәтегеҙ.

*Көҙгө эштәр бөткәс, мәҙрәсәгә сит ауылдың шәкерттәре йыйыла башланы.*(М.Ғафури).

2. Бирелгән һүҙҙәрҙе эйәртеүсе һүҙ итеп, башҡарылыу һүҙбәйләнештәре яһағыҙ, мәғәнәүи төрөн әйтегеҙ.

*Көттөк, таныш, осраттым, яҡыныраҡ, тырышабыҙ.*

3. Һөйкәлеү һүҙбәйләнештәрен яҙып алып, эйәртеүсе һүҙҙәрен күрһәтегеҙ.

*Уларҙың гудок тауыштары ошо тылсымлы кистең тынлығын боҙоп ҡуялар.*

4. Бирелгән һүҙҙәрҙе индереп, йәнәшәлек һүҙбәйләнештәре төҙөгөҙ, эйәртеүсе киҫәген күрһәтегеҙ, мәғәнәүи төрөн әйтегеҙ.

*Әкрен, тау, Ватаныбыҙ, күңелһеҙ, китәсәк, еткәнсе.*

### III вариант

1. Һөйләмдәге һүҙбәйләнештәрҙе айырып алып, эйәртеүсе һүҙен билдәләгеҙ, һорау ҡуйыҒыҙ, уларҙың компоненттары араһындағы мәғәнәүи һәм грамматик бәйләнеш төрҙәрен күрһәтегеҙ.

*Кескәй геройҙың йөрәге тибеүҙән туктаған урында хәҙер ябай обелиск тора.*

2. Башҡарылыу һүҙбәйләнештәрен күсереп алып, эйәртеүсе һүҙен билдәләгеҙ, мәғәнәүи төрөн әйтегеҙ.

*Ситтән килгән кешеләрҙе фатирға гел Фатиха әбейгә урынлаштыралар.*

3. Түбәндәге һүҙҙәрҙе эйәртеүсе һүҙ итеп, һөйкәлеү һүҙбәйләнештәре төҙөгөҙ.

*Ышанысы, килгәнен, йорто, эргәһендә.*

4. Түбәндәге һүҙҙәрҙе индереп, йәнәшәлек һүҙбәйләнештәре яһағыҙ, уларҙың мәғәнәүи төрөн әйтегеҙ.

*Китап, эшләһәләр, килделәр, күмәкләп, ошолай, яңылыш, класта.*

### IV вариант

1. Һөйләмдәге һүҙбәйләнештәрҙе айырып алып, эйәртеүсе һүҙен билдәләгеҙ, һорау ҡуйыҒыҙ, уларҙың компоненттары араһындағы мәғәнәүи һәм грамматик бәйләнеш төрҙәрен күрһәтегеҙ.

*Яҙғы көндөң иртәнге йылы ҡояшы дымлы ер өҫтөнә күтәрелгән быуҙарҙан үтә төштө.*

2. Һөйкәлеү һүҙбәйләнештәрен яҙып алып, эйәртеүсе һүҙен күрһәтергә.

*Халыҡтар дуҫлығының асыҡ миҫалдарын һәр ерҙә осратырға мөмкин.*

3. Түбәндәге һүҙҙәрҙе индереп, йәнәшәлек һүҙбәйләнештәре яһағыҙ, уларҙың эйәртеүсе һүҙен күрһәтегеҙ, мәғәнәүи төрөн әйтегеҙ.

*Саф, күп, йүгерҙеләр, уңыш, иҫкесә, кейенеү, урман.*

4. Түбәндәге һүҙҙәрҙе эйәртеүсе һүҙҙәр итеп, башҡарылыу һүҙбәйләнештәре яһағыҙ, һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәүи төрөн әйтегеҙ.

*Күҙ һалыу, ашығыу, тиҙерәк, алыҫта, сағыштырыу, бергәләшеп, күстәнәс.*

## II. «Ябай һөйләм» темаһы буйынса контроль эштәр

### I вариант

1. Бирелгән һөйләмдәрҙең нисә составлы һәм ниндәй һөйләм икәнлеген әйтегеҙ, баш киҫәктәрен күрһәтегеҙ: *1. Белгәнде эшләт, белмәгәнде өйрәт. 2.Төньякка ҡараған тәҙрә төбөндә бәләкәй генә өҫтәл. 3. Был хаҡта бөтөнләй онотолған. 4. Мин дә, бөтә көсөмдө һалып, башҡаларҙан ҡалышмаҫҡа тырышам.*

2. Тыныш билдәләрен ҡуйыҒыҙ, уларҙы аңлатығыҙ, һөйләмдәргә тулы синтаксик анализ эшләгеҙ: *1. Аталары быңдай тормошто күрһә һис шикһеҙ хайран ҡалып баш сайҡар ине. 2. Янғантау беҙҙең Башҡортостандағы санаторий тәпәшәк кенә бер тауҙа урынлашҡан.*

3. Һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатығыҙ, уларҙың мәғәнәүи һәм грамматик бәйләнеш төрҙәрен күрһәтегеҙ, эйәртеүсе киҫәген билдәләгеҙ.

*Япраҡтарҙа ысыҡ тамсылары ваҡ ҡына ынйы бөртөктәре һымаҡ ялтырайҙар.*

4. Хәл әйтеменең ойоштороусы киҫәге ниндәй һүҙҙәрҙән килә һәм ул ҡайҙа тора?

5. Төрлө мәғәнәләге инеш һүҙҙәр менән ике һөйләм яҙығыҙ.

### II вариант

1. Бирелгән һөйләмдәрҙең нисә составлы һәм ниндәй һөйләм икәнлеген әйтегеҙ, баш киҫәктәрен күрһәтегеҙ:

*1. Декабрҙең беренсе шәп бурандары. 2. Бөтә донъя ишелеп килгән ҡар тулҡынына әйләнде. 3. Исмаһам, юлға маяҡ та ҡаҙап өлгөрмәгәндәр.* (Д.Юлтый). *4. Әллә, улым, был эшеңде ташлап, эргәбеҙгә ҡайтаһыңмы?* (Н.Мусин).

*2.* Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, уларҙы аңлатығыҙ, һөйләмдәргә тулы синтаксик анализ эшләгеҙ: *1. Шәриф һаҡлыҡ менән генә килеп ҡаҙан өҫтөндә ултырған шәмде алды ла тирә-яҡты диҡҡәт менән тыңлай-тыңлай ишеккә йүнәлде.* (З.Биишева). *2. Бөтә тирә-яҡ тауҙар ағастар ҡош-ҡорттар бөтәһе лә ҡояш сығасағын һиҙенгән һымаҡ иркен тын алып ебәрҙеләр.* (З.Биишева).

3. Һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатығыҙ, уларҙың мәғәнәүи һәм грамматик бәйләнеш төрҙәрен күрһәтегеҙ, эйәртеүсе киҫәген билдәләгеҙ.

*Ул ҡустыһының яурынынан ҡаҡты ла көр тауыш менән ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.*

4. Кәм һөйләмдәр бер составлы һөйләмдәрҙән нимәһе менән айырыла?

5. Тарҡау өндәш һүҙ индереп, бер һөйләм яҙығыҙ.

## III вариант

*1.* Бирелгән һөйләмдәрҙең нисә составлы һәм ниндәй һөйләм икәнлеген әйтегеҙ, баш киҫәктәрен күрһәтегеҙ: *1. Был һүҙҙәрҙән барыбыҙға ла күңелле булып китте. 2. Юлдыбайҙа ҙур кәүҙәле кешеләргә булған ҡыҙыҡһыныу бала саҡтан уҡ йәшәп килә. 3. Был турала яңыраҡ хәбәр иткәйнеләр. 4. Нисек тә әмәлен табырға, уларға ярҙам итергә кәрәк бит.* (Н.Мусин).

*2.* Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, уларҙы аңлатығыҙ, һөйләмдәргә тулы синтаксик анализ эшләгеҙ: *1. Беҙ улар менән иҫәнләшкәс шунда ҡунып китергә булып уларҙың сәй ҡайнатырға яҡҡан уттары эргәһенә йыйылынырға ултырҙыҡ.* (М.Ғафури). *2. Тәбиғәттәге һәр нәмә ағас бөрөләре ҡар аҫтынан башын ҡалҡытҡан умырзая сәскәләре ҡыйыҡтан тамған тамсылар бөтәһе лә ысын күңелдән шатланған кеүек күренә.* (З.Биишева).

3. Һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатығыҙ, уларҙың мәғәнәүи һәм грамматик бәйләнеш төрҙәрен күрһәтегеҙ, эйәртеүсе киҫәген билдәләгеҙ.

*Улар тауҙың биленә бүрәнәнән яһалған бейек бер вышка ултырттылар ҙа ерҙе быраулай башланылар.*

4. Инфинитив-модаль һөйләмдәрҙең төп үҙенсәлектәре нимәлә?

5. Әйтелгән фекергә ышанысты, дөрөҫләүҙе белдереүсе инеш һүҙ индереп, бер һөйләм яҙығыҙ. Инеш һүҙҙе күрһәтегеҙ.

## IV вариант

*1.* Бирелгән һөйләмдәрҙең нисә составлы һәм ниндәй һөйләм икәнлеген әйтегеҙ, баш киҫәктәрен күрһәтегеҙ: *1. Тәбиғәтте һаҡлау буйынса бик күп эштәр эшләргә була. 2. Көньяҡ Уралдың матур һәм данлы йылғаларының береһе - Һаҡмар. 3. Бигәнәш участкаһы начальнигын эшенән сығарҙылар. 4. Ете тапҡыр үлсә, бер тапҡыр киҫ.*

2. Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, уларҙы аңлатығыҙ, һөйләмдәргә тулы синтаксик анализ эшләгеҙ: *1. Был араны миңә аҙаҡ ҙурая төшкәс күп тапҡырҙар йәйәү-яльпы урарға тура килде.* (Б.Бикбай). *2. Илгужа кәмәһен әкренәйтә лә тын ҡалып осраған бер нәмәне йылға бормаларын ҡырсынлы утрауҙарҙы һыу аҫтындағы ҙур-ҙур таштарҙы бөтәһен дә ҡарап бара.*

3. Һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатығыҙ, уларҙың мәғәнәүи һәм грамматик бәйләнеш төрҙәрен күрһәтегеҙ, эйәртеүсе киҫәген билдәләгеҙ.

*Ул байып барған ҡояштың нурҙарына ҡараштарын текләгән дә онотолоп уйнай.*

4.Эйәһеҙ һөйләм менән билдәһеҙ эйәле һөйләм араһында ниндәй айырма бар?

5. Икеләнеүҙе, шикләнеүҙе белдереүсе инеш һүҙ менән бер һөйләм яҙығыҙ.

## III. «Эйәртеүле ҡушма һөйләм» темаһы буйынса контроль эштәр

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе түбәндәге схема буйынса тикшерергә:

а) баш һәм эйәрсән һөйләмдәрҙе билдәләргә, баш һөйләмдән сығып эйәрсән һөйләмгә һорау ҡуйырға, эйәрсән һөйләмдең төрөн әйтергә;

б) эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә бәйләнеү сараларын күрһәтергә (интонация, теркәүес, бәйләүес, килеш ялғауы, килеш ялғауы менән бәйләүес, мөнәсәбәттәш һүҙҙәр);

в) эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмдәге ниндәй һүҙҙе (киҫәкте) асыҡлауын билдәләргә;

г) баш һәм эйәрсән һөйләмдәрҙең бөтә киҫәктәрен билдәләргә.

### I вариант

1. Түбәндәге эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе бирелгән схема буйынса тикшерегеҙ.

*1. Ләкин өйгә ремонт барғанлыҡтан, Емельяновтарҙың ғаиләһе һарайҙа йәшәгән була. 2. Әгәр кеше башҡа берәүгә шатлыҡ килтерә икән, быны менән ул үҙе лә сикһеҙ шат буласаҡ. 3. Хеҙмәт кешене биҙәй тигән дөйөм хәҡиҡәт бар. 4. Бөтә бәләнең башы шунда: тәнҡитте дөрөҫ ҡабул итмәйһең, һүҙ күтәрмәйһең.* (Р.Низамов).

2. Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, һөйләмдәрҙе анализлағыҙ.

*1. Әҙәбиәт уҡыусылар музыка яратыусылар өсөн дә был ҡыҙыҡлы булыр тип уйлап иҫтә ҡалғандарҙы яҙырға теләнем.*(С.Агиш). *2. Бигерәк тә шундай хәлдәр булғылай әйтәйек малсылыҡта ул бик һәйбәт ә игенселектә шәп түгел...* (С.Агиш). *3. Ҡыҫҡаһы минең кәңәш шул был һөйләшеүҙе бер йылға кисектереп торайыҡ.* (М.Кәрим).

### II вариант

1. Түбәндәге эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе бирелгән схема буйынса тикшерегеҙ.

*1. Уны һиңә күрһәтергә тырышыуымдың тағы бер сәбәбе шул: ул егеттә һинең улыңдың ғәҙәттәре бар. (*Һ.Дәүләтшина). 2. *Ул, Сөнәгәттәр киткән яҡтан күҙен алмай, оҙаҡ ҡарап торҙо.* (Ж.Кейекбаев). 3. *Тик шуныһы йәл: ҡыҙыл командир оҙаҡ торманы уларҙа, бер көндән һуң отряды менән тағы китеп барҙы.* (Б.Бикбай). 4. *Автобус юлда туҡтап ултырмағанда, өлгөрәһеләре икән.* (Ш.Янбаев).

2. Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, һөйләмдәрҙе анализлағыҙ.

*1. Ул һиңә әйтеп китәм тип ике тапҡыр волость өйөнә барҙы.* (Һ.Дәүләтшина). 2. *Кеше ҡайҙа ғына эшләмәһен һәм ниндәй генә пост алып тормаһын уның ҡулына ил байлығы халыҡ байлығы тапшырыла. 3. Ҡасимдың башына ҡапыл ғына бер фекер килде шул мәмерйәгә инергә.* (Н.Мусин).

### III вариант

1. Түбәндәге эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе бирелгән схема буйынса тикшерегеҙ.

*1. Ерҙән йолҡоп алып, уңдырышһыҙ тупраҡҡа ташланған үҫемлек йәшәй алмаған һымаҡ, кеше лә йәмғиәттән тыш бәхетле була алмай.* (А.Толстой). *2. Эстән берәй төрлө тауыш килмәйме икән тип, аҙыраҡ тыңлап алдылар.* (И.Ғиззәтуллин). *3. Ҡайҙа алдынғы тәжрибәгә таянып эш итәләр, шунда һөҙөмтә лә һәйбәт. 4. Был хәл эште бер аҙ ҡатмарлаштырһа ла, бригадаларҙа эш туҡталманы.*

2. Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, һөйләмдәрҙе анализлағыҙ.

*1. Ул ҡорамалдарҙы бөгөн генә ҡайҙан алырға шуныһын уйлап еткермәгәнһең. 2. Беҙгә шуныһы оҡшаны һеҙҙең уҡыусылар төрлө сараларҙа актив ҡатнашалар. 3. Ағас буйға ныҡ үҫмәһен ә йыуанайып елгә ҡаршы ныҡ торһон өсөн уның сатыр ботаҡтарын бысып ҡуялар.* (Н.Мусин).

### IV вариант

1. Түбәндәге эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе бирелгән схема буйынса тикшерегеҙ.

*1. Бик һаҡланып эш итергә кәрәк: майға һыу-маҙар ҙа, сүп-сар ҙа эләкмәһен.* (Ә.Байрамов). *2. Урман эсенә инеп киткән атаһы күҙҙән юғалғас та, Ғәйзулла алға киткән*

*быҙауҙарын йылға буйына ҡайырҙы.* (Я.Хамматов). *3. Сәскәгә күмелгән уйым-уйым яландары матур булһа ла, тауҙары ҡырыҫ был яҡтың.* (Н.Мусин). *4. Һәр кеше тәбиғәтте яклауҙа актив ҡатнашҡанда ғына, был закондарҙың көсө буласаҡ.*

2. Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, һөйләмдәрҙе анализлағыҙ.

*1. Һәр кемдең уйын бер нәмә биләй был отряд ниңә килде икән?* (Ф.Иҫәнғолов). *2. Намыҫлы кеше буларак халыҡҡа хеҙмәт итегеҙ һеҙгә берҙән – бер теләгем шул.* (Я.Хамматов). *3. Кешеләрҙең аңлылығы ни тиклем юғары булһа илебеҙҙең ҡеүәтен үҫтереүҙә уларҙың активлығы шул тиклем киңерәк буласаҡ.* (Газетанан).

## Бөтә «Синтаксис» бүлеге буйынса контроль эштәр

### I вариант

1. Тулы синтаксик анализ эшләгеҙ, һөйләмдең тибын аңлатығыҙ, схемаһын төҙөгөҙ.

*Өҙәңгемә һин һикереп баҫһаң,*
*Дәртем таша ине шул саҡта,*
*Күкрәгемә йөрәк һыймай ине,*
*Ә хәҙер һин минән йыраҡта.* (М.Кәрим).

2. Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, уларҙы аңлатығыҙ, һөйләмгә синтаксик анализ эшләгеҙ, схемаһын күрһәтегеҙ.

*1. Миңлеғәле лә ағаһынан ҡалышманы әммә ул тиҙ арыны ҡыҙарынды тиргә мансылған күлдәге тәненә йәбеште.* (Я.Хамматов). *3. Ысынлап та бригада кешеләре менән бергәләп үткәргән тәүге ялдан уҡ Яҡуп байтаҡ нәмәләрҙе аңланы күберәк йөрәк йылылығы төрлө ярҙам кәрәк кешеләргә.*

2.Тиң тултырыусылар һәм улар алдында дөйөмләштереүсе һүҙ булған бер һөйләм яҙығыҙ, уны анализлағыҙ.

3. Объект мөнәсәбәтле һүҙбәйләнештәргә биш миҫал яҙығыҙ, уларҙың грамматик бәйләнеш төрөн әйтегеҙ.

4. Һөйләмгә синтаксик анализ эшләгеҙ, уның ниндәй һөйләм икәнлеген әйтегеҙ.

*Бына Миңлегөл шул уҡ ҡиәфәттә, башын артҡараҡ саңҡайта биреп, урам буйынан атлай, ҡайҙа барыуын да уйламай.*

### II вариант

1. Тулы синтаксик анализ эшләгеҙ, һөйләмдең тибын аңлатығыҙ, схемаһын төҙөгөҙ.

*Беҙҙең һағынғанды белгәндерме, үҙ һағышына түҙә алмағандырмы – уныһы беҙгә ҡараңғы, яҙғы йылғанаҡтар йырылғанда, Мәрәһим ауылға кире әйләнеп ҡайтты.* (М.Кәрим).

2. Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, уларҙы аңлатығыҙ, һөйләмгә синтаксик анализ эшләгеҙ, схемаһын күрһәтегеҙ.

*1. Ҡайғы ҙур булһа ла ул шуны аңлай тормош дауам итә. 2. Далалағы сал ҡылған суҡтарының елдә бәүелеүе лә күпереп торған ап-аҡ болоттарҙың еләҫлеге лә ҡыйылып үткән йәшендәр саткыһы ла бөтәһе лә бар һиндә.* (Х.Ғиләжев).

2. Аныҡлау мөнәсәбәтле һүҙбәйләнештәргә биш миҫал яҙығыҙ, уларҙың грамматик бәйләнеш төрөн әйтегеҙ.

3. Өҫтәлмәлек рәүешендә айырымланған эйәһе булған бер һөйләм яҙығыҙ.

4. Һөйләмгә синтаксик анализ эшләгеҙ, уның ниндәй һөйләм икәнлеген әйтегеҙ.

*Ул Фатиманы йыуатырға тип ниҙер әйтергә теләгәйне лә, шул арала Һөйөмбикә ҡайтып инде.* (Ж.Кейекбаев).

### III вариант

1. Тулы синтаксик анализ эшләгеҙ, һөйләмдең тибын аңлатығыҙ, схемаһын төҙөгөҙ.

*Самауыр ҡайнағас, Сәрби иҫке ҡалай һауыттан сәй алып, сәйнүккә һалып ебәрҙе лә һыу ағыҙа башланы; самауырҙың мороно тар булғанлыҡтан, һыу бик оҙаҡ аҡты.* (М.Ғафури).

2. Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, уларҙы аңлатығыҙ, һөйләмгә синтаксик анализ эшләгеҙ, схемаһын күрһәтегеҙ.

*1. Йәй көнө ҡайын урманында юк нәмә юк ҡоштар һайрай күбәләктәр оса еләктәр бешә. 2. Ҡала тотош баҡсаларға күмелгән Алма-Атаға килеп төшөү менән беренсе булып күҙгә ташланған нәмә шул.*

3. Хәл мөнәсәбәтле һүҙбәйләнештәргә биш миҫал яҙығыҙ, уларҙың грамматик бәйләнеш төрөн әйтегеҙ.

4. Билдәһеҙ эйәле һөйләмгә бер миҫал яҙығыҙ.

5. Һөйләмгә синтаксик анализ эшләгеҙ, уның ниндәй һөйләм икәнлеген әйтегеҙ.

*Төш яҡынлап бара, әммә колхозсылар эшкә сығырға ашыҡмайҙар әле, бары Шәриф менән бер төркөм йәштәр генә ырҙынға китте.* (Б.Бикбай).

**IV вариант**

1. Тулы синтаксик анализ эшләгеҙ, һөйләмдең тибын аңлатығыҙ, схемаһын төҙөгөҙ.

*Мин шулай уйлайым: ике йөҙләлек менән сирләүселәр бөтһә, һәр урында кеше менән кешеләрсә мөғәмәлә итеү генә тороп ҡалһа, беҙ алға табан шәберәк барыр инек.* (Ф.Иҫәнғолов).

2. Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, уларҙы аңлатығыҙ, һөйләмгә синтаксик анализ эшләгеҙ, схемаһын күрһәтегеҙ.

*1. Мин хәҙер үткән ғүмерҙең сал түбәһенән артҡа әйләнеп ҡарайымда шундай фекергә киләм хикмәт бөтөнләйе менән ҡаласта булмаған хикмәт беҙҙә булған.* (М.Кәрим).*2.Башҡортостандың ҡалалары үҫә ауылдары үҙгәрә яңы юлдар һалына былар барыһы ла эшсе ҡулдарға үҙенсәлекле һәйкәл ул.*

3. Һөйкәлеү һүҙбәйләнешенә бер нисә миҫал яҙығыҙ, эйәртеүсе киҫәгән билдәләгеҙ.

4. Атама һөйләм ҡалған бер составлы һөйләмдәрҙән нимәһе менән айырыла?

5. Һөйләмгә синтаксик анализ эшләгеҙ, уның ниндәй һөйләм икәнлеген әйтегеҙ.

*Военкомат алдында һәр ваҡыттағыса йәнлелек: бер-нисә егеүле ат тора, улар тирәһендә, ир-аттан тыш, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға ла күренә.*(Н.Мусин).

**Контрольная работа** проводится после изучения каждого раздела. Каждый студент выполняет вышеуказанные задания в письменном виде. При выполнении письменной работы пользоваться конспектами лекций и учебниками не разрешено. Длительность проведения письменной работы – 40-45 мин.

**Критерии оценки (в баллах***) (должны строго соответствовать рейтинг плану по макс. и мин. колич. баллов и только для тех, кто учится с использованием модульно-рейтинговой системы обучения и оценки успеваемости студентов):*

- *8-10 баллов выставляется студенту, если* задание выполнено правильно на 75-100 %;

- *5-7 баллов выставляется студенту, если* задание выполнено правильно на 60-75 %*;*

- *2-4 баллов выставляется студенту, если* задание выполнено правильно на 59 % и меньше*;*

**Тесты для текущего контроля**
**«Фонетика», «Орфография», «Графика» бүлектәре буйынса тест һорауҙары**

**I вариант**

1. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле орфографияһының төп принцибы булып ниндәй принцип тора?
1) морфологик принцип;
2) фонетик принцип;
3) тарихи-традицион принцип.
2. [у] фонемаһы телдең вертикаль торошо буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) өҫкө күтәрелеш;
2) урта күтәрелеш;
3) түбәнге күтәрелеш.
3. [ә] фонемаһы телдең горизонталь торошо буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) алғы рәт;
2) артҡы рәт;
3) урта рәт.
4. [ө] фонемаһы ирендәрҙең ҡатнашыу-ҡатнашмауы буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) иренләшкән;
2) иренләшмәгән;
3) яртылаш иренләшкән.
5. [h] фонемаһы тауыш һәм шауҙың ҡатнашыу-ҡатнашмау нисбәте буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) талғын (сонор);
2) яңғырау;
3) һаңғырау.
6. [v] фонемаһы артикуляция (яһалыу) рәүеше буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) шартлаулы (йомолоусы);
2) ышҡыулы (ек);
3) ҡалтыраулы.
7. Һәмзә йәки замма фонемаһы артикуляция (яһалыу) урыны буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) ирен;
2) тел уртаһы;
3) тамаҡ төбө.
8. *Уйын* һүҙен *уйнау* итеп үҙгәрткәндә ниндәй фонетик үҙгәреш барлыҡҡа килә?
1) редукция;
2) протеза;
3) элизия.
9. *Унбиш*һүҙен *умбиш* тип әйткәндә ниндәй фонетик үҙгәреш күҙәтелә?
1) ассимиляция;
2) диссимиляция;
3) метатеза.
10. *Ҡолономдоң ҡойроғон тотоп борҙом* һөйләмендәге һүҙҙәрҙә ниндәй гармония төрө күҙәтелә?
1) аңҡау гармонияһы;
2) ирен гармонияһы;
3) һуҙынҡылар менән тартынҡылар гармонияһы.

**II вариант**

1. Хәҙерге башҡорт алфавитында нисә хәреф бар?

1) 39;
6) 40;
3) 42.
2. [ү] фонемаһы телдең вертикаль торошо буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) өҫкө күтәрелеш;
2) урта күтәрелеш;
3) түбәнге күтәрелеш.
*3.* [а] фонемаһы телдең горизонталь торошо буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) алғы рәт;
2) артҡы рәт;
3) урта рәт.
4. [о] фонемаһы ирендәрҙең ҡатнашыу-ҡатнашмауы буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) иренләшкән;
2) иренләшмәгән;
3) яртылаш иренләшкән.
5. [ғ] фонемаһы тауыш һәм шауҙың ҡатнашыу-ҡатнашмау нисбәте буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) талғын (сонор);
2) яңғырау;
3) һаңғырау.
6. [й] фонемаһы артикуляция (яһалыу) рәүеше буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) шартлаулы (йомолоусы);
2) ышҡылыулы (ек);
3) ҡалтыраулы.
7. [һ] фонемаһы артикуляция (яһалыу) урыны буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) ирен;
2) тел уртаһы;
3) тамаҡ.
8. *Халыҡ*һүҙен *халкы*итеп үҙгәрткәндә ниндәй фонетик үҙгәреш барлыҡҡа килә?
1) редукция;
2) протеза;
3) элизия.
9. *Көнбағыш* һүҙен *көмбағыш*тип әйткәндә ниндәй фонетик үҙгәреш күҙәтелә?
1) ассимиляция;
2) диссимиляция;
3) метатеза.
10. *Бөркөтлөнөң бөйөк бөркөтө*һөйләмендәге һүҙҙәрҙә ниндәй гармония төрө күҙәтелә?
1) аңҡау гармонияһы;
2) ирен гармонияһы;
3) һүҙынҡылар менән тартынҡылар гармонияһы.

## «Һүҙьяһалыш» бүлеге буйынса тест һорауҙары

### I вариант

1. Артыҡ һүҙҙе тап.
1) һөйөнөс;2) дәртлән;3) ҡунаҡсыл;4) биҙән;5) айлап.
2. *Һөйләүселәргә* һүҙенең тамыры ҡайһы?
1) һөй;2) һөйлә;3) һөйләү;4) һөйләүсе;5) һөйләүселәр.
3. *Эшсе, ташсы*һүҙҙәре нисек яһалған?
1) ялғау ярҙамында;;
2) һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән;

3) һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән;
4) һүҙҙәрҙе парлау юлы менән;
5) һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән.
4. *Студентмын* һүҙендә ниндәй ялғау бар?
1) күплек ялғауы;3) килеш ялғауы;5) бер ялғау ҙа юҡ.
2) эйәлек ялғауы;4) хәбәрлек ялғауы;
5. *Һүҙьяһалыш* тел фәненең ниндәй бүлегенән айырылып сыҡҡан?
1) фонетика;3) лексикология;5) фразеология.
2) грамматика;4) орфография;
6. Тамырҙаш булмаған һүҙҙе билдәлә:
1)аҙай; 2) аҙсылыҡ; 3) аҙғын; 4) аҙһын; 5) аҙлыҡ.
7. Ҡушма һүҙҙәргә инмәгән осраҡты билдәләгеҙ.
1) ижад ит;3) үҙәк өҙгөс;5) матур ҡыҙ
2) һирәк-һаяҡ;4) бишбармаҡ;
8. *Унлыҡ* һүҙе ниндәй юл менән яһалған?
1) лексик-семантик һүҙьяһалыш;
2) фонетик һүҙьяһалыш;
3) морфологик һүҙьяһалыш;
4) лексик-морфологик һүҙьяһалыш;
5) лексик-синтаксик һүҙьяһалыш.
9. Исем яһаусы ялғауҙарҙы билдәләгеҙ.
1)-ла/-лә, -лан/-лән, -ыр/-ер;
2) -лай/-ләй, -лаш/-ләш, -са/-сә;
3) -лы/-ле, -һыҙ/-һеҙ, -сан/-сән;
4)-сы/-се,-ма/-мә,-ғыс/-гес;
5) -ҡай/-кәй, -сыҡ/-сек, -соҡ/-сөк
10. Һүҙҙең артабан бүленә алмай торған иң бәләкәй мәғәнәүи өлөшө нимә тип атала?
1) тамыр;2) морфема;3) аффикс;4) өн;5) нигеҙ.

**II вариант**

1. Артыҡ һүҙҙе тап:
1) дуҫлаш;3) эҙемтә;5) мәктәптә.
2) һиҙгер;4) кәбәнләтә;
2. *Уҡыусыларға* һүҙенең тамыры ҡайһы?
1) уҡ; 3) уҡыу;5) уҡыусылар.
2) уҡы;4) укыусы;
3. *БДУ, БР, совхоз*һүҙҙәре нисек яһалған?
1) һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән;
2) ялғау ярҙамында;
3) һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән;
4) һүҙҙәрҙе парлау юлы менән;
5) һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән.
4. *Болоттарҙың* һүҙендә ниндәй ялғау бар?
1) зат ялғауы;
2) эйәлек ялғауы һәм килеш ялғауы;
3) килеш ялғауы;
4) күплек ялғауы һәм килеш ялғауы;
5) бер ялғау ҙа юҡ.
5. *Һүҙьяһалыш* менән иң тығыҙ бәйләнгән тел ғилеме бүлектәрен билдәләгеҙ.
1) морфология, пунктуация, стилистика;
2) фонетика, грамматика, лексикология;
3) лексикография, орфоэпия, пунктуация;

4) орфография, орфоэпия, тел тарихы;
5) фразеология, фразеология, фонетика.
6. Тамырҙаш булмаған һүҙе билдәлә:
1)серек;3) серҙәш;5) серетке.
2) серемтә;4) сереткес;
7. Ҡушма һүҙәргә инмәгән осраҡты билдәләгеҙ.
1) шалт ит;3) юғары белемле; 5) яңы эш.
2) алан-йолан; 4) йылъяҙма
8. *Райондаш* һүҙе ниндәй юл менән яһалған?
1) лексик-семантик һүҙьяһалыш;
2) фонетик һүҙьяһалыш;
3) морфологик һүҙьяһалыш;
4) лексик-морфологик һүҙьяһалыш;
5) лексик-синтаксик һүҙьяһалыш.
9. Исем яһаусы ялғауҙарҙы билдәләгеҙ.
1) -й/-ай/-әй, -һыт/-һет, -ылда/-елдә;
2) -лап/-ләп, -лата/-ләтә, -ын/-ен;
3) -лы/-ле, -сыл/-сел, -тай/-тәй;
4) -са/-сә, -даш/-дәш, -лыҡ/-лек;
5) -ҡай/-кәй, -сыҡ/-сек, -соҡ/-сөк
10. Һүҙҙең артабан бүленә алмай торған иң бәләкәй мәғәнәүи өлөшө нимә тип атала?
1) өн; 2) морфема; 3) нигеҙ; 4) тамыр; 5) аффикс.

## «Исем», «Алмаш» темалары буйынса тест һорауҙары

### I вариант

1. Бирелгән әйтемдәрҙә төшөм килештәге исем ҡайһы рәттә?
1) Тыуған илеңде һаҡлау - ата-әсәңде яҡлау.
2) Ас балыҡ ҡармаҡҡа тиҙ ҡаба.
3) Иң татлы емеш - хеҙмәт емеше.
2. *Балам* һүҙендә ниндәй ялғау бар?
1) күплек ялғауы;3) килеш ялғауы;
2) хәбәрлек ялғауы; 4) эйәлек заты ялғауы.
3. *Сәрбиямал, ни өсөндөр, бөтә **игтибарын**... Емешкә йүнәлтте* (З. Биишева). Билдәләнгән һүҙҙең килешен билдәләгеҙ.
1) эйәлек килеш;3) төшөм килеш;
2) төбәү килеш;4) сығанаҡ килеш.
4. Исемгә хас булмаған грамматик категорияны билдәләгеҙ.
1) һан;3) эйәлек;
2) килеш; 4) дәрәжә.
5. *Әсәһемен* һүҙендә ниндәй ялғауҙар бар?
1) күплек һәм эйәлек заты ялғауы;
2) эйәлек һәм хәбәрлек заты ялғауы;
3) килеш һәм эйәлек заты ялғауы;
4) хәбәрлек заты ялғауы ғына.
6. *Игенселек, йәшелсәселек, кортсолоҡ* һүҙҙәренең ниндәй үҙенсәлеге бар?
1) тик берлектә ҡулланылалар;
2) килеш ялғауҙарын ҡабул итмәйҙәр;
3) тик күплектә ҡулланылалар;
4) эйәлек заты ялғауын ҡушып булмай.
7. *Бындай, шундай, һәр кем* һүҙҙәре ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?

1) сифат; 2) исем; 3) алмаш; 4) рәүеш.

8. Бирелгән һөйләмдә алмашты табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ: *Бөтә ер дерелдәй.*(Ғ.Әмири)

1) зат алмашы; 2) билдәләү алмашы;

3) күрһәтеү алмашы; 4) билдәһеҙлек алмашы.

9. *Ҡайһығыҙҙың тәүәкәллеге етер икән был эшкә?* Һорауалмашы ниндәй ялғауҙар ҡабул иткән.

1) күплек һәм килеш ялғауы;

2) эйәлек килеш ялғауы һәм хәбәрлек заты ялғауы;

3) хәбәрлек заты ялғауы һәм сығанаҡ килеш ялғауы;

4) эйәлек заты ялғауы һәм эйәлек килеш ялғауы.

10. Билдәһеҙлек алмаштарын күрһәтегеҙ.

1) әллә кем, нимәлер, ҡайһы бер; 2) был, ошо, шул;

3) үҙем, теләһә ниндәй; 4) бер кем, үҙебеҙ, нимә.

**II вариант**

1. Бирелгән әйтемдәрҙә урын-ваҡыт килештәге исем ҡайһы рәттә?

1) Иленә таянған - биленә таяныр.

2) Мәҡәлдә хикмәт булыр.

3) Ғәҙел кеше ҡәҙергә лайыҡ.

2. ***Кешемен*** һүҙендә ниндәй ялғау бар?

1) күплек ялғауы;3) килеш ялғауы;

2) хәбәрлек ялғауы; 4) эйәлек заты ялғауы.

3. *Емеш хатта әлеге урын-ер йыйылған* ***һандыҡтың*** *артына уҡ инеп тын да алмай шымып торҙо* (З. Биишева). Билдәләнгән һүҙҙең килешен билдәләгеҙ.

1) эйәлек килеш;3) төшөм килеш;

2) төбәү килеш;4) сығанаҡ килеш.

4. Исемгә хас булған грамматик категорияны билдәләгеҙ.

1) дәрәжә; 3) һөйкәлеш;

2) килеш; 4) заман.

5. *Әсәйемде* һүҙендә ниндәй ялғауҙар бар?

1) эйәлек һәм хәбәрлек заты ялғауы;

2) күплек һәм килеш ялғауы;

3) килеш һәм эйәлек заты ялғауы;

4) эйәлек заты ялғауы һәм килеш ялғауы.

6. *Ҡәрҙәшлек, матурлыҡ, кешелек* һүҙҙәре ниндәй үҙенсәлеккә эйә?

1) тик күплектә ҡулланыла

2) эйәлек заты ялғауҙарын ҡабул итмәйҙәр

3) күплек ялғауы йәбешмәй

4) килеш ялғауҙарын ҡушып булмай

7. *Барлыҡ, теге, нисектер* һүҙҙәре ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?

1) сифат; 3) алмаш;

2) исем; 4) рәүеш.

8. Бирелгән һөйләмдә алмашты табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:

*Әйтерһең, кемдер балсыҡты аҙлап ҡына матурлап өйөп ҡуйған.* (А. Карнай)

1) юҡлыҡ алмашы;3) билдәләү алмашы;

2) күрһәтеү алмашы;4) билдәһеҙлек алмашы.

9. *Ҡайһығыҙға ҡушырҙар иңде ул яуаплы эште?* Һорауалмашын табып, уның аффикстарын билдәләгеҙ.

1) хәбәрлек заты ялғауы һәм төшөм килеш ялғауы;

2) эйәлек заты ялғауы һәм төбәү килеш ялғауы;

3) эйәлек килеш ялғауы һәм күплек ялғауы;

4) күплек ялғауы һәм урын-ваҡыт килеш ялғауы.
10. Юҡлыҡ алмаштарын күрһәтегеҙ.
1) һис ниндәй, нимәлер, унын;
2) әллә кем, ҡайһы бер, бер ни;
3) бер кем, һис бер, бер ҙә;
4) ни ҡәҙәр, һис ҡайҙа, һәр бер.

## «Исем» темаһына мини-тест

1. Бирелгән һүҙҙәрҙә ниндәй аффикстар бар?

***китаптарын***

1. күплек;
2. күплек һәм эйәлек;
3. күплек һәм килеш;
4. килеш, күплек һәм эйәлек;
5. күплек, килеш һәм хәбәрлек;

***уҡытыусыб'ыҙ***(баҫымға иғтибар итегеҙ)

1. килеш;
2. күплек;
3. эйәлек категорияһы;
4. хәбәрлек категорияһы;
5. килеш һәм күплек;

***уҡытыус'ыбыҙ***(баҫымға иғтибар итегеҙ)

1. күплек;
2. килеш;
3. хәбәрлек категорияһы;
4. килеш һәм зат;
5. эйәлек категорияһы.

2. ***Көрәк, сүкеш, балта, сөй, ҡаҙаҡ*** һүҙҙәренең ҡайһылары – тамыр исем, ҡайһылары – яһалма исем?

1. бөтәһе лә яһалма исем
2. 1-се, 4-се һүҙҙәр – тамыр исем
3. 2-се, 5-се һүҙҙәр – яһалма, ҡалғандары – тамыр исем
4. 3-сө, 4-се һүҙҙәр – тамыр, ҡалғандары – яһалма
5. бөтәһе лә тамыр исем

## «Һүҙьяһалыш» һәм «Морфемика» буйынса биремдәр

1. Тамырҙаш һүҙҙәрҙе айырып яҙығыҙ.

1) емеш, емелдәй, ем, ем-ем итә, емешлек;
2) атһыҙ, аттар, атҡаҙанған, яҡшатланыу, атлай;
3) йырғанаҡ, йырлай, йырғыс, йырсы, йырылыу;
4) йыуғыс, йыуынты, йыуан, йыуһа, йыуантыҡ, йыуындыҡ;
5) аҡ, аҡһым, ағарыу, ағын, аҡһа;
6) ашамлыҡ, ашыҡ, ашлыҡ, ашығыс, ашлама;
7) балсыҡ, балғалаҡ, балан, балауыҙ, балланыу;
8) төш(көндөҙ), төшөнөү, төшөү, төшлөк, төшөнкө, төшкөһөн;
9) үрләү, үртәү, үрҙә, үрт, үр;
10) алға, алырға, алдан, алғас, алмашыу.

2. Бирелгән һүҙҙәр рәтендә артыҡ һүҙҙе табығыҙ.

1) һана, һандар, иҫәпһеҙ-һанһыҙ, һандыҡ, һанағансы;
2) йәйенке, йәйләү, йәйгеһен, йәйләүес;
3) белем, белеш, белдереү, беләк, белдек;
4) күр, күргәҙмә, күрек, күренекле;

5) уйын, уйсан, уйҙар, уйлай;
6) теркәүес, терәтеү, терәк, терһәк;
7) көлкө, көләмәс, көләмһөрәү, көлһыу, көләс;
8) еткер, етеш, етем, етлегеү, етте;
9) төшөм, төшөнкөлөк, төшлөк, төшөү, төшөргә;
10) еләҫ, елкән, елгәргес, еләк, елғыуар.

**Ҡылым**

1. *Йыйылыш башланған.* Был һөйләмдәге ҡылым ниндәй заманды белдерә?
А. Хәҙерге заман Б. Шаһитлы үткән заман
В. Шаһитһыҙ үткән заман Г. Билдәле киләсәк заман
Д. Билдәһеҙ киләсәк заман
*2.Эшләштем* ҡылымының йүнәлешен билдәләгеҙ:
А. Төп йүнәлеш Б. Ҡайтым йүнәлеше
В. Төшөм йүнәлеше Г. Уртаҡлыҡ йүнәлеше Д. Йөкмәтеү йәнәлеше
3. Икенсе затҡа ҡараған һәм күплектә торған ҡылымды табығыҙ:
А. Уҡыйҙар Б. Киләбеҙ В. Йоҡлай
Г. Яҙаһығыҙ Д. Уҡыйым
4. *Хат ташыусы апай бөгөн дә беҙгә инмәне.* Һөйләмдә ниндәй ҡылымдың аҫтына һыҙылған?
А. Исем ҡылым Б. Сифат ҡылымдың хәҙерге заман формаһы
В. Хәл ҡылым Г. Сифат ҡылымдың үткән заман формаһы
Д. Уртаҡ ҡылым
5. Һөйләүсенең булып үткән эш-хәлде күреп-белеп һөйләүен ҡылымдың ниндәй заман формаһы белдерә.
А. Хәбәр һөйкәлешенең шаһитлы үткән заманы
Б. Шарт һөйкәлеше
В. Теләк һөйкәлеше
Г. Хәбәр һөйкәлешенең шаһитһыҙ үткән заманы
Г. Хәбәр һөйкәлешенең хәҙерге заманы
6. *Барыһы ла уны йотлоғоп тыңлай.* Һөйләмдә ҡылымды табып, уның һөйкәлешен билдәләгеҙ:
А. Бойороҡ һөйкәлеше Б. Хәбәр һөйкәлеше
В. Шарт һөйкәлеше Г. Теләк һөйкәлеше Д. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше
7. Ҡылымға хас булмаған грамматик категорияны билдәләгеҙ:
А. Заман Б. Дәрәжә В. Зат
Г. Йүнәлеш Д. Һөйкәлеш
8. *Сигенмәҫкә!* Ҡылымдың төркөмсәһен билдәләгеҙ:
А. Исем ҡылым Б. Сифат ҡылымдың хәҙерге заман формаһы
В. Хәл ҡылым Г. Сифат ҡылымдың үткән заман формаһы
Д. Уртаҡ ҡылым
9. Ҡылымдың ниндәй һөйкәлеше - *һа/-һә* ялғауҙары менән яһала:
А. Бойороҡ һөйкәлеше Б. Хәбәр һөйкәлеше
В. Шарт һөйкәлеше Г. Теләк һөйкәлеше Д. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше
10. *Әйткәнмен*. Билдәләнгән ялғау ниндәй категорияны белдерә:
А. Эйәлек заты ялғауы Б. I зат хәбәрлек заты ялғауы
В. III зат хәбәрлек заты ялғауы Г. II зат хәбәрлек заты ялғауы
Д. Килеш ялғауы
11. Эш-хәрәкәтте башҡарырға теләүҙе йәки уны үтәргә саҡырыуҙы ҡылымдың ниндәй һөйкәлеше белдерә?
А. Бойороҡ һөйкәлеше Б. Хәбәр һөйкәлеше
В. Шарт һөйкәлеше Г. Теләк һөйкәлеше Д. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше

12. *Оҙакламай күк үлән өҫтөнә балаҫ түшәп, ишек алдына сәй урыны ~~әҙерләнде~~* (З.Биишева). билдәләнгән ҡылым ниндәй йүнәлештә?

А. Төп йүнәлеш Б. Ҡайтым йүнәлеше

В. Төшөм йүнәлеше Г. Уртаҡлыҡ йүнәлеше Д. Йөкмәтеү йәнәлеше

13. Шарт һөйкәлеше булған һөйләмде билдәләгеҙ:

А. Бөгөн мин унда бармаҡсымын Б. Йөрөүҙәрем бушҡа булманы

В. Ул беҙгә кисә килгән Г. Күп көлһәң, иларһың.

Д. Бөгөн көн әҙерәк асылды.

14. Ҡылымдың заман категорияһы ниндәй һөйкәлешкә хас:

А. Бойороҡ һөйкәлеше Б. Хәбәр һөйкәлеше

В. Шарт һөйкәлеше Г. Теләк һөйкәлеше

Д. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше

15. Башланғыс формала бирелгән ҡылымды билдәләгеҙ:

А. Башла Б. Башланы В. Башлаһын

Г. Баш Д. Башлайыҡ

**Рәүеш**

1. *Ғәли тиҙ яҙа, шәп уҡый.* Был һөйләмдәге рәүештәрҙең төрөн билдәләгеҙ:

А. Хәл рәүеше Б. Ваҡыт рәүеше В. Урын рәүеше

Г. Сәбәп-маҡсат рәүеше Д. Күләм-дәрәжә рәүеше

2. Һөйләмдә рәүеште табып, дәрәжәһен билдәләгеҙ:

*Атай, йортоң тәҙрәләре*

*Үтә лә ҙур уйылған.* (Д.Талхина)

А. Аҙһытыу дәрәжәһе Б. Артыҡлыҡ дәрәжәһе

В. Сағыштырыу дәрәжәһе Г. Төп дәрәжә

Д. Һөйләмдә рәүеш юҡ

3. *Ул алпан толпан баҫып сығып китте.* Һөйләмдә парлы рәүеште табып, уның дөрөҫ яҙылышын билдәләгеҙ:

А. Айырым яҙыла

Б. Ҡушып яҙыла

В. Һыҙыҡ аша яҙыла

Г. Араларында өтөр ҡуйыла

Д. Һөйләмдә рәүеш юҡ

4. *Сәрбиямал хужаларса ҡыйыу атлап өйгә инде* (З.Биишева). Билдәләнгән һүҙ ниндәй рәүеш төркөмсәһенә ҡарай?

А. Төп рәүеш Б. Оҡшашлыҡ рәүеше

В. Ваҡыт рәүеше Г. Урын рәүеше

Д. Күләм-дәрәжә рәүеше

5. Ҡайһы юлда күләм-дәрәжә рәүештәре бирелгән:

А. Юҡҡа, юрый, юрамал

Б. Бер аҙ,әҙ-мәҙ, бер юлы, күп

В. Беҙҙенсә, уларса, йәштәрсә

Г. Юғары, яҡын, алыҫ

Д. Иртәгә, аҙаҡ, тиҙҙән

6. Рәүеш ниндәй грамматик үҙенсәлектәре буйынса сифатҡа оҡшаған?

А. Предметтың билдәһен белдерә һәм дәрәжә менән үҙгәрә

Б. Эш-хәлдең билдәһен белдерә һәм дәрәжә менән үҙгәрә

В. Билдәне белдерә һәм дәрәжә менән үҙгәрә

Г. Билдәне белдерә

Д. Дәрәжә менән үҙгәрә

7. Ваҡыт рәүеше булған һөйләмде табығыҙ:

А. Айҙар шатлығынан үрле-ҡырлы һикерҙе.

Б. Малай олатаһының уға юрамал асыуланыуын аңланы.
В. Муса Гәрәев һауаға 250 тапҡыр күтәрелә.
Г. Ямғыр кискә ҡарай ҡапыл туҡтаны.
Д. Көпә-көндөҙ йоҡлаған көн күрмәҫ.
8. Рәүештең сағыштырыу дәрәжәһе ... аффикстары ҡушылып яһала:
А. –лата/-ләтә
Б. –дай/-дәй, ҙай/-ҙәй, -лай/-ләй, -тай/-тәй
В. –раҡ/-рәк, -ыраҡ/-ерәк, -ораҡ/-өрәк
Г. –са/-сә
Д. –ын/-ен, -он/-өн.
9. Ҡайһы юлда тамыр рәүештәр бирелгән?
А. Тегеләй, былай, башҡортса, инглизсә, йәшләй
Б. Йыш, элек, тиҙ, һуң, шәп
В. Быйыл, иртәнсәк, бөгөн
Г. Илке-һалҡы, иртәле-кисле, һирәк-һаяҡ, үрле-ҡырлы
Д. Аяҡ үрә, ялан баш, баш түбән, көн оҙон
10. Артыҡлыҡ дәрәжәһендәге рәүеш булған һөйләмде табығыҙ:
А. Атай йырҙың һүҙҙәрен бик асыҡ әйтеп йырланы.
Б. Саф һауала күберәк йөрөргә кәрәк.
В. Көн дә иртәнсәк бүлмәне елләтергә кәрәк.
Г. Ауыл советы канцелярияһында шәмгә ут башҡа өйҙәргә ҡарағанда һуңыраҡ алынды.

**Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре**

1. *Дуҫың менән кәңәшләш.* Бәйләүес ниндәй килештәге һүҙҙән һуң килгән?
А. Төп килештәге Б. Эйәлек килештәге
В. Төшөм килештәге Г. Сығанаҡ килештәге
Д. Төбәү килештәге
2. Түбәндәге теркәүестәрҙең төрөн билдәләгеҙ: *шуға, шуға күрә, шунлыҡтан, шуның һөҙөмтәһендә*
А. Бүлеү теркәүестәре Б. Ҡабатлау теркәүестәре
В. Һығымта яһау теркәүестәре Г. Ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре
Д. Йыйыу теркәүестәре
3. Киҫәксәләрҙе күрһәтегеҙ:
А. Сөнки, әгәр, хатта, йә, йәки Б. Ах, ох, ух, эх, ай-һай, ура
В. Ғына, генә, ҡына, кенә Г. Өсөн, кеүек, тураһында, һымаҡ
Д. Бар, юҡ, түгел, буғай, кәрәк
4. *Гөрһөлдәү бер алыҫлашып, бер яҡынлашып һаман дауам итте* (З.Биишева). Һөйләмдә теркәүестәрҙе табып, уларҙың төрөн билдәләгеҙ:
А. Йыйыу теркәүестәре Б. Ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре
В. Бүлеү теркәүестәре Г. Аныҡлау теркәүестәре
Д. Эйәртеү теркәүестәре
5. Бәйләүестәрҙе күрһәтегеҙ:
А. Сөнки, әгәр, хатта, йә, йәки Б. Ах, ох, ух, эх, ай-һай, ура
В. Ғына, генә, ҡына, кенә Г. Өсөн, кеүек, тураһында, һымаҡ
Д. Бар, юҡ, түгел, буғай, кәрәк
6. *Ҡапҡа төбөндә Иштуған ғына тороп ҡалды* (З.Биишева). Һөйләмдә киҫәксәне табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:
А. Көсәйтеү, раҫлау киҫәксәһе Б. Икеләнеү киҫәксәһе
В. Һорау киҫәксәһе Г. Сикләү киҫәксәһе
Д. Билдәләү киҫәксәһе
7. Ымлыҡтарҙы билдәләгеҙ:

А. Әгәр, сөнки, хатта, йә, йәки Б. Их, эх, уф-ф, ай-һай, эй-й
В. Ғына, генә, үк, кенә Г. өсөн, сәбәпле, менән, кеүек
Д. Бар, юҡ, кәрәк, дөрөҫ, түгел
8. Мөнәсәбәт һүҙ булған һөйләмде табығыҙ:
А. Ул аталарса ярҙам итте.
Б. Хәлимәнең был турала күп ишеткәне бар.
В. Өмәгә былар ҙан тыш байтаҡ ҡына егеттәр саҡырылған.
Г. Ауылға табан юл тотайыҡ, юҡһа һәләк булырбыҙ бит
Д. Көтөүсе шунда уҡ риза булды.

**Үҙ аллы һүҙ төркөмдәрен ҡабатлау өсөн тест**

1. Бирелгән һүҙҙәрҙең ҡайһыһы артыҡ:
А. Нәфисә Б. Ауыл В. Сибай
Г. Төйәләҫ Д. “Арҡайым”
2. Исем ниндәй грамматик категориялар менән үҙгәрә:
А. Һан, заман, килеш, эйәлек заты
Б. Һан, дәрәжә, килеш, хәбәрлек заты
В. Һан, эйәлек заты, хәбәрлек заты, килеш
Г. Һөйкәлеш, килеш, һан
Д. Килеш, һан, йүнәлеш, зат
3. *Ата байлығы* *__улға__* *йоҡмаҫ, әсә байлығы* *__ҡыҙға__* *йоҡмаҫ*. Билдәләнгән һүҙҙең килешен билдәләгеҙ:
А. Эйәлек килеш Б. Төшөм килеш В. Төбәү килеш
Г. Сығанаҡ килеш Д. Урын-ваҡыт килеш
4. *Ауылдаштарымдың* һүҙендә ниндәй категория ялғауҙары бар?
А. Хәбәрлек заты, килеш Б. Күплек, эйәлек заты
В. Эйәлек заты, килеш Г. Күплек, эйәлек заты, килеш
Д. Бөтә яуаптар ҙа дөрөҫ
5. *Ҡайҙа барма –* *__йәшел__* *шәл бөркәнгән ағастар, урман.* Билдәләнгән һүҙҙең дәрәжәһен билдәләгеҙ:
А. Төп дәрәжә Б. Сағыштырыу дәрәжәһе
В. Артыҡлыҡ дәрәжәһе Г. Аҙһытыу дәрәжәһе
Д. Бер яуап та дөрөҫ түгел
6. Бирелгән һүҙбәйләнештәр араһынан шартлы сифатты табып билдәләгеҙ:
А. Күк сәскә Б. Усаҡ таҡта
В. Түңәрәк өҫтәл Г. Иҫке төҙөлөш Д. Тәмле икмәк
7. *Уҡығандың теле икәү*. Һанды табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:
А. Төп һан Б. Тәртип һаны
В. Бүлем һаны Г. Йыйыу һаны Д. Сама һаны
8. Бүлем һандары булған яуапты табығыҙ
А. Ҡыҙлы өйгә ҡырҡ ат бәйләнер.
Б. Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл...
В. Икешәр, өсәр кешегә бүленеп, старателдәр төрлө урындан шурф ҡаҙҙылар.
Г. Ит бешеп сыҡҡас ҡына берәү ишек туҡылдатҡан.
Д. Меңәрләгән ҡош, бөжәктәр тауышы өҙлөкһөҙ ишетелә.
9. *Ҡалын ҡар менән ҡапланған яландар* *__әллә ҡайҙарға__* *тиклем күренеп ята.* Билдәләнгән алмаштың төркөмсәһен билдәләгеҙ:
А. Зат алмашы Б. Һорау алмашы
В. Билдәләү алмашы Г. Билдәһеҙлек алмашы Д. Юҡлыҡ алмашы
10. Ҡылым ниндәй грамматик категориялар менән үҙгәрә:
А. Зат, һан, йүнәлеш, күләм, заман Б. Килеш, зат, һан, заман, күләм
В. Зат, һан, заман, күләм, дәрәжә Г. Һан, заман, эйәлек, хәбәрлек

Д. Дөрөҫ яуап юҡ

11. *Егет әйләнеп ҡайтыр юл тапмаған.* Һөйләмдә ҡылымды табып, уның һөйкәлешен билдәләгеҙ:

А. Хәбәр һөйкәлеше Б. Бойороҡ һөйкәлеше

В. Теләк һөйкәлеше Г. Шарт һөйкәлеше

Д. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше

12. Хәбәре билдәле киләсәк замандағы ҡылымдан килгән һөйләмде табығыҙ:

А. Ҡалған эшкә ҡар яуыр. Б. Дөрөҫөн әйтеп һөйләшкәнгә үпкәләмә.

В. Өйгә ҡайтҡас, әсәһе асыуланасаҡ. Г. Яҡында ғына кәкүк саҡыра.

Д. Муйылбикә лә Мәғфүрәне яҡлашты.

13. Затһыҙ ҡылымдарҙың төрҙәрен билдәләгеҙ:

А. Сифат ҡылым, исем ҡылым, уртаҡ ҡылым, хәл ҡылым

Б. Шарт һөйкәлеше, исем ҡылым

В. Бойороҡ һөйкәлеше, теләк һөйкәлеше, шарт һөйкәлеше

Г. Хәбәр һөйкәлеше

Д. Хәбәр һөйкәлеше, сифат ҡылым

14. *Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,*
*Эй туғандар, наҙанлыҡтан <u>ҡурҡыу</u> кәрәк!*

Билдәләнгән ҡылымдың төркөмсәһен билдәләгеҙ.

А. Сифат ҡылым Б. Исем ҡылым

В. Уртаҡ ҡылым Г. Хәл ҡылым Д. Дөрөҫ яуап юҡ

15. *Алдында торған малайҙың күрәләтә алдашыуы бошондорҙо.* Һөйләмдә рәүеште табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:

А. Хәл рәүеше Б. Ваҡыт рәүеше

В. Урын рәүеше Г. Сәбәп-маҡсат рәүеше Д. Күләм-дәрәжә рәүеше

**Синтаксис һәм пунктуация**

1. Өндәш һүҙ эргәһендә тыныш билдәләре дөрөҫ ҡуйылған һөйләмде табығыҙ:

А. Ҡайҙа юл тоттоң әле Әхмәт?

Б. Һау бул йәндәй күргән өләсәйем.

В. Ә һин Хәмит атыңды мен дә хәҙер үк Ташбатҡанға кит.

Г. Йә, Әхмәҙи ағай, иҙәнеңде тигеҙләп алайыҡ.

Д. Егеттәр әйҙәгеҙ булмаһа һыу инеп алайыҡ.

2. *Өлкән сержант, йәғни беҙҙең командир, миңә күҙ төшөрөп алды.* (Ғ. Аллаяров) Был һөйләмдә өтөрҙәрҙең ни өсөн ҡуйылғанын аңлатығыҙ:

А. Өҫтәлмәлекте айырыу өсөн

Б. Өндәш һүҙ эргәһендә

В. Тиң эйәләр эргәһендә

Г. Өтөрҙәр урынында һыҙыҡтар ҡуйылырға тейеш

Д. Инеш һүҙбәйләнеш эргәһендә ҡуйылған

3. *Ҡарағат, бөрлөгән, муйыл, балан – бөтәһе лә бар.* Был һөйләмдә һыҙыҡтың ни өсөн ҡуйылғанын аңлатығыҙ:

А. Дөйөмләштереүсе һүҙ алдында ҡуйылған

Б. Баш һөйләм менән эйәрсән һөйләм араһында ҡуйылған

В. Инеш һүҙҙе айырыу өсөн ҡуйылған

Г. Бер үк һүҙ төркөмөнән килгән эйә менән хәбәр араһында ҡуйылған

Д. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр араһында ҡуйылған

4. *Ямғыр төндә туктаған.* Был һөйләмдә ямғыр һүҙе ниндәй һөйләм киҫәге булып килгән?

А. ЭйәБ. Хәбәр В. Тултырыусы Г. Аныҡлаусы Д. Хәл

5. Хәбәр һөйләмде күрһәтегеҙ:

а. Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.

Б. Ҡайҙа юл тоттоң?

В. Ҡыш көндәре үтеп, яҙ етте.

Г. Тау-таш ярыр ир-азаматтары һыната буламы?

Д. Дан һиңә, дан, Башҡортостаным!

6. *Ул <u>дыуамал</u> һөргөн китә инде.* Аҫтына һыҙылған һүҙ эргәһендә ниндәй тыныш билдәләре ҡуйылырға тейеш?

А. Ике яғынан да һыҙыҡ ҡуйыла

Б. Бер яғынан һыҙыҡ, икенсе яғынан өтөр ҡуйыла

В. Бер ниндәй ҙә тыныш билдәһе ҡуйылмай

Г. Ике яғынан да өтөр ҡуйыла

Д. Башҡа бер тыныш билдәһе ҡуйыла

7. *Бөгөн бик һуңлап торолдо.* Һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ

А. Билдәле эйәле һөйләм Б. Билдәһеҙ эйәле һөйләм

В. Дөйөм эйәле һөйләм Г. Эйәһеҙ һөйләм

Д. Атама һөйләм

8. *Кинйәгәолдар барғанда, өсөнсө смена эштән туктамағайны әле.* Был ниндәй һөйләм?

А. Ябай һөйләм Б. Эйәртеүле ҡушма һөйләм

В. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм Г. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм

Д. Бер составлы һөйләм

9. Түбәндәге һөйләмдә ниндәй тыныш билдәһе ҡуйырға кәрәк: *Ер йөҙөндә яңынан һуғыш дауылы ҡупмаһын (?) бөтә әсәләрҙең теләге шул.*

А. Өтөр Б. Һыҙыҡ В. Ике нөктә

Г. Нөктәле өтөр Д. Тыныш билдәһе кәрәкмәй

10. Эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ: *Томан таралғас, көн асылды.*

А. Урын һөйләм Б. Ваҡыт һөйләм В. Рәүеш һөйләм

Г. Күләм-дәрәжә һөйләм Д. Сәбәп һөйләм

11. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдә ябай һөйләмдәр бер-береһе менән ниндәй бәйләнештә тора икәнен асыҡлағыҙ: Һөйләшеү араһында берәү бейергә төшөп китә, берәү һыҙҙырып гармунда уйнай, берәү йырлай.

А. Һанап китеү Б. Ҡаршы ҡуйыу

В. Дөйөмләштереү Г. Икенсеһенең мәғәнәһен асыҡлау

Д. Икенсеһенең мәғәнәһен тултырыу

12. Эйәрсән һөйләме тултырыусы һөйләм булған вариантты күрһәтегеҙ:

А. Гөлйөҙөмдөң хаты яҙылып бөтөүгә, Хәмдиә килеп инде.

Б. Күңел ни ҡушһа, ҡул шуны башҡара.

В. Матур килде быйыл бал яҙы.

Г. Ат аунаған ерҙә төк ҡала.

Д. Аҙыҡ мул ерҙә ауырыу булмай.

13. Теҙмә ҡушма һөйләмде билдәләгеҙ:

А. Аяҡ аҫты дерелдәп тора, сөнки күтерлек башлана.

Б. Хөрмәт иткән хөрмәт күрер.

В. Урман ҡалын, ағастары бик бейек булғанлыҡтан, юлға ҡояш төшмәй.

Г. Ҡулың оҫта булһын, һүҙең ҡыҫҡа булһын

Д. Ямғыр тымғанда, төн уртаһы еткәйне инде.

14. *Хәмдиә әбей кеше менән һүҙгә килешмәҫ, ғәйбәт һөйләмәҫ, берәүҙе лә тикшермәҫ.* Төҙөлөшө буйынса был ниндәй һөйләм?

А. Йыйнаҡ һөйләм Б. Кәм һөйләм

В. Ҡушма һөйләм Г. Тиң киҫәктәр менән ҡатмарландырылған һөйләм

Д. Бер составлы һөйләм

15. *Акселән өҫтөндә таң тантана итә, ҡоштар һайраша, аҡһыл күк томан күтәрелә, тотош офоҡ киң ҡыҙыл байраҡ тартҡан һымаҡ алһыуланып яҡтыра бара,*

*иртәнге тынлыкты ярып, тракторҙар эшкә тотона.* Был ҡушма һөйләм нисә ябай һөйләмдән төҙөлгән?

А. ИкеБ. Өс В. Дүрт Г. Биш Д. Алты

16. *Өй алдында оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙылар.* Аҫтына һыҙылған һүҙҙәр ниндәй һүҙбәйләнеш төрөнә ҡарай?

А. Ярашыу Б. Башҡарылыу В. Йәнәшәлек

Г. Һөйкәлеү Д. Теҙмә һүҙбәйләнеш

17. *Был донъяла көслө түгел, еңә, балам, түҙемле.* Һөйләмдә эйәне табып, уның ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен билдәләгеҙ:

А. Исем Б. Сифат В. Һан Г. Ҡылым Д. Алмаш

18. Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә бәйләнеү сараһын билдәләгеҙ. *Әгәр умарталағы инә ҡорт үлһә, ҡалған ҡорттар теләһә ҡайһы яҡҡа таралып бөтәләр.*

А. Килеш ялғауҙары ярҙамында Б. Интонация ярҙамында

В. Бәйләүес ярҙамында Г. Шарт һөйкәлеше ярҙамында

Д. Теркәүес ярҙамында

19. Тиң булмаған аныҡлаусылары булған һөйләмде табығыҙ:

А. Хәбир сажин буйлы, баһадир кәүҙәле, ыласын кеүек ҡыйыу, яҡты ҡарашлы, шат, шаян егет булып үҫте.

Б. Һеҙҙә эре биҙәкле ҡыҙыл тауарҙар күп буғай.

В. Батыр йөрәкле, аҙ һүҙле, сабый күңелле беҙҙең командир ана шунда ул.

Г. Күҙҙең яуын алалар аҡ, һары, ал сәскәләр.

Д. Тәҙрә ҡапҡастары күк, зәңгәр төҫтәргә буялған.

20. Составында инеш һүҙ булған һөйләмде табығыҙ:

А. Һин, Рәжәпов, минән бәхетлерәк – әсәйең бар.

Б. Һинеңсә эшләп ҡарарбыҙ.

В. Был һеҙгә, йәштәргә, ҡарата әйтелмәгән.

Г. Минеңсә, эште бер ҡасан да шикләнеп башларға ярамай.

Д. Мин, ябай һалдат кеше, уға ҡаршы һүҙ таба алмайым.

**Критерии оценки (в баллах***) (должны строго соответствовать рейтинг плану по макс. и мин. колич. баллов и только для тех, кто учится с использованием модульно-рейтинговой системы обучения и оценки успеваемости студентов):*

За каждый правильный ответ в тесте студент получает0,25 балла. За тестовые задания студент в итоге может набрать максимум 20 баллов.

## ТЕСТЫ ДЛЯ РУБЕЖНОГО КОНТРОЛЯ
## III КУРС ӨСӨН ТЕСТ ҺОРАУҘАРЫ

### Вариант А

1.*Балыҡсыларҙы* һүҙенең тамыры ҡайһы?

1. Балыҡсылар 2. Балыҡсы 3. Балыҡ 4. Бала 5. Бал

2.Һандарҙа ялғауҙарҙың яҙылышы ҡағиҙәгә тап килгән һүҙҙе күрһәтегеҙ:

1. 23-сө рәт 2. XX-се быуат 3. 2000-се йыл

4. 9-сы май 5. 8-нсе мәктәп

3.Икенсе затҡа ҡараған һәм берлектә торған ҡылымды табығыҙ:

1.Уҡыйҙар 2.Киләбеҙ 3.Йоҡлай 4.Яҙаһың 5.Уҡыйым

4.*Атҡа* һүҙендә ниндәй ялғау бар?

1. һан ялғауы2. Һан ялғауы һәм зат ялғауы

3. Килеш ялғауы 4. Зат ялғауы 5. Был һүҙҙә ялғауҙар юҡ

5.*Сибай институты, тимер юлы, тел ғилеме, ер eлəгe* һүҙҙәре нисек яһалған?

1. Яһаусы ялғауҙар ярҙамында 2. Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән

3. Һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән 4. Һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән

5. Был һүҙҙәр яһалма һүҙҙәр түгел, тамыр һүҙҙәр

6. Тик яһаусы ялғауҙар ғына ҡабул иткән һүҙҙәр бирелгән юлды билдәләгеҙ:

1. Елһеҙ, елбер, елдән, елде, елгә

2. Ирекле, ирекһеҙ, иректә, иректең, ирекккә

3. Күҙле, күҙһеҙ, күҙлек, күҙлә, күҙәт

4. Килә, килде, киләсәк, килер, киләләр

5. Эштә, эштән, эштең, эште, эштәр

7.*Баш ҡала, бала саҡ, ялан баш, үҙ аллы* һүҙҙәре нисек яҙылырға тейеш?

1. Ҡушып яҙылалар 2. Араларына һыҙыҡса ҡуйыла

3. Араларына өтөр ҡуйылырға тейеш 4. Айырып яҙылалар

5. Башҡа төрлө тыныш билдәһе ҡуйыла

8. Ҡайһы вариант ҡағиҙә буйынса дөрөҫ яҙылған?

1. 23-өнсө күнегеү 2. 23-нсө күнегеү 3. 23-сө күнегеү

4. 23-се күнегеү 5. 23-ө күнегеү

9. Кешенең хис-тойғоһон, ихтыяр-теләген, кисерештәрен белдергән һүҙҙәр нисек атала?

1. Сифат 2. Оҡшатыу һүҙҙәре 3. Рәүеш

4. Ымлыҡ 5. Модаль һүҙҙәр

10. Күплек ялғауы ҡабул иткән һүҙҙе табығыҙ:

1. Китаптан 2. Йырсылар 3. Ерем 4. Ҡолонсаҡ 5. Ағиҙелкәй

11. *Башҡортса* һүҙе ниндәй һүҙ төркөмө?

1. Сифат 2. Исем 3. Ҡылым 4. Рәүеш 5. Алмаш

12. Исемгә хас булған грамматик категорияны билдәләгеҙ:

1. Хәбәрлек 2. Дәрәжә 3. Күләм

4. Барлыҡ-юҡлыҡ 5. Һөйкәлеш

13.*Был ергә былтыр ҙа еләккә килгәйнек* һөйләмендә *был* алмашы ниндәй төркөмгә ҡарай:

1. Күрһәтеү алмашы 2. Билдәһеҙлек алмашы

3. Зат алмашы 4. Юҡлыҡ алмашы 5. Һорау алмашы

14. Шартлы сифатты билдәләгеҙ:

1. Шәкәрле 2. Ҡышҡы 3. Матурыраҡ 4. Йәшел 5. Зәңгәрһыу

15. *Былтыр шул тауға походҡа барғайныҡ.* Был һөйләмдәге рәүештең төрөн билдәләгеҙ:

1.Хәл рәүеше 2.Ваҡыт рәүеше 3.Урын рәүеше

4.Сәбәп-маҡсат рәүеше 5.Күләм-дәрәжә рәүеше

**Вариант В**

1. *Йыуылған* ҡылымының йүнәлешен билдәләгеҙ:

1.Төп йүнәлеш 2.Ҡайтым йүнәлеше 3.Төшөм йүнәлеше

4.Уртаҡлыҡ йүнәлеше 5.Йөкмәтеү йүнәлеше

2.*Кеше ышанмаҫ хәбәр һөйләмә, ағай!* (Я.Хамматов).Һөйләмдә сифат ҡылым ниндәй заманды белдерә:

1. Үткән заман сифат ҡылым 2. Хәҙерге заман сифат ҡылым

3. Киләсәк заман сифат ҡылым 4. Бер заманды ла күрһәтмәй

5. Бында сифат ҡылым юҡ

3. *Һин дә көнөңдө бушҡа уҙғарма, ағай* (Я. Хамматов).Был һөйләмдәге рәүештең төрөн билдәләгеҙ:

1. Хәл рәүеше 2. Ваҡыт рәүеше 3. Урын рәүеше

4. Сәбәп-маҡсат рәүеше 5. Күләм-дәрәжә рәүеше

4. Сифатҡа хас грамматик категорияны билдәләгеҙ:

1. Дәрәжә 2. Һан 3. Йүнәлеш

4. Килеш 5. Билдәлелек-билдәһеҙлек

5. *Укына* ҡылымының йүнәлешен билдәлегеҙ:

1. Төп йүнәлеш 2. Ҡайтым йүнәлеше 3. Төшөм йүнәлеше
4. Уртаҡлыҡ йүнәлеше 5. Йөкмәтеү йүнәлеше

6. Өсөнсө затҡа ҡараған һәм берлектә торған ҡылымды табығыҙ:

1. Йоҡлай 2. Яҙаһың 3. Киләбеҙ
4. Уҡыйҙар 5. Ашайым

7.Бәйләүестәрҙе күрһәтегеҙ:

1. Ғәҙәттә, билдәле, күрәһең, бәлки, ихтимал
2. Тураһында, хаҡында, тарафынан, кеүек, өсөн
3. Әммә, ләкин, шуға күрә, һәм, шулай ҙа
4. Бик, үтә, ғәжәп, уғата, нәҡ, шаҡтай
5. Их, атаҡ-атаҡ, уф, эттәгенәһе, әйҙә

8. *Белемлегә йот юк, белемһеҙгә кот юк (Мәкәл)* һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һөйләм киҫәге булып килгән?

1. Хәл 2. Тултырыусы 3. Аныҡлаусы 4. Хәбәр 5. Эйә

9. *Укытыусы ағай оҙон буйлы, ҡуйы ҡара мыйыклы, үткер ҡарашлы бер кеше икән* (Б.Бикбай).Был һөйләмдәге тиң киҫәктәрҙең төрөн билдәләгеҙ:

1. Эйә 2. Хәбәр 3. Аныҡлаусы 4. Тултырыусы 5. Хәл

10. *Егет хәҙер үҙе матур ғына өндәшкәс, Алһыуҙың да кырыҫлығы юғалды (Ғ.Ибраһимов)* һөйләмендә сәбәп эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә бәйләнеү юлын күрһәтегеҙ:

1. Мөнәсәбәт һүҙ менән 2. Хәл ҡылым ярҙамында
3. Ерҙә һүҙе менән 4. Был эйәртеүле ҡушма һөйләм түгел
5. Интонация ярҙамында

## Вариант С

**1.**Түбәндәге һөйләмдә ниндәй тыныш билдәһе ҡуйырға кәрәк: *Күсей ауылыныкылар бөтәһе йырсы һәм бейеүсе булһа, Төркмәндекеләр (?) ауылы менән һунарсы* (Ә.Чаныш).

1. Өтөр 2. Һыҙыҡ 3. Ике нөктә
4. Нөктәле өтөр 5. Тыныш билдәһе кәрәкмәй

2. Теркәүеслеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдә, ябай һөйләмдәр бер-береһе менән ниндәй бәйләнештә тора икәнен асыҡлағыҙ: *Иптәш кыҙҙары артабан укыу өсөн төрлө ҡалаларға таралды, ә Сажидә юғары белем тураһында башына ла килтермәне.*

1. Икенсеһенең мәғәнәһен асыҡлау 2. Йыйыу
3. Бүлеү-кабатлау 4. Сағыштырыу-каршы ҡуйыу
5. Икенсеһенең мәғәнәһен тултырыу

3.*Үрләттеләр минең бер һабаҡташымды (З.Ураксин)* һөйләменең төрөн билдәләгеҙ:

1. Билдәле эйәле һөйләм 2. Билдәһеҙ эйәле һөйләм
3. Дөйөм эйәле һөйләм 4. Эйәһеҙ һөйләм
5. Инфинитив-модаль һөйләм

4. *Хат көтөү* һүҙбәйләнешенең төрөн билдәләгеҙ:

1. Ярашыу 2. Башҡарылыу 3. һөйкәлеү
4. Йәнәшәлек 5. Дөрөҫ яуап юҡ

5. *Мин, беҙҙең осрашыу башҡасараҡ булыр, тип уйлағайным (Ш.Янбаев)* һөйләме ниндәй төргә ҡарай:

1. Эйә һөйләм 2. Хәбәр һөйләм 3. Аныҡлаусы һөйләм
4. Тултырыусы һөйләм 5. Хәл һөйләм

## IV КУРС ӨСӨН ТЕСТ ҺОРАУҘАРЫ

### Вариант А

1. *Ҡыҙ* *бирмәк*, *килен* *төшөрмәк* - *әүәл-әүәлдән килгән йола инде* (Н.Мусин)һөйләмендәге аҫтына һыҙылған затһыҙ ҡылымдарҙың төркөмсәһен билдәләгеҙ:

1. Исем ҡылым 2. Сифат ҡылым 3. Уртаҡ ҡылым
4. Хәл ҡылым 5. Ҡылым төркөмсәһенең береһенә лә ҡарамай

2.*Һайлай торғас, иң арыу тигән өсәүһе тороп ҡалған* (Ф.Иҫәнғолов) һөйләмендәге һандың төркөмсәһен билдәләгеҙ:

1. Тәртип һаны 2. Кәсер һаны3. Йыйыу һаны
4. Бүлем һаны 5. Сама һаны

3. *Ағас, урман, аяҡ, йүкә* һүҙҙәре нисек яһалған?

1. Яһаусы ялғауҙар ярҙамында 2. Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән
3. Һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән 4. Һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән
5. Был һүҙҙәр яһалма түгел, тамыр һүҙҙәр

4. *Алъяпҡыс, аҡҡош, елғыуар, меңъяпраҡ, бишбармаҡ* һүҙҙәре нисек яһалған?

1. Яһаусы ялғауҙар ярҙамында 2. Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән
3. Һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән 4. һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән
5. Был һүҙҙәр яһалма һүҙҙәр түгел, тамыр һүҙҙәр

5. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдә, ябай һөйләмдәр бер-береһе менән ниндәй бәйләнештә тора икәнен асыҡлағыҙ: *Ул миңә фронт хәлдәрен һөйләне, мин уны Мәскәү яңылыҡтары менән таныштырҙым* (Д.Ю.)

1.Һанап китеү 2.Ҡаршы ҡуйыу 3.Дөйөмләштереү
4.Икенсеһенең мәғәнәһен асыҡлау 5.Икенсеһенең мәғәнәһен тултырыу

6.*Былтыр шул тауға походҡа барғайныҡ.* Был һөйләмдәге рәүештең төрөн билдәләгеҙ:

1. Хәл рәүеше 2. Ваҡыт рәүеше 3. Урын рәүеше
4. Сәбәп-маҡсат рәүеше 5. Күләм-дәрәжә рәүеше

7. Рәүешкә хас грамматик категорияны билдәләгеҙ:

1. Дәрәжә 2. Һан 3. Йүнәлеш
4. Килеш 5. Билдәлелек-билдәһеҙлек

8. *Ҡыуҙырт* ҡылымының йүнәлешен билдәлегеҙ:

1. Төп йүнәлеш 2. Ҡайтым йүнәлеше
3. Төшөм йүнәлеше 4. Уртаҡлыҡ йүнәлеше
5. Йөкмәтеү йүнәлеше

9. Икенсе затҡа ҡараған һәм берлектә торған ҡылымды табығыҙ:

1. Йоҡлай 2. Яҙаһың 3. Киләбеҙ
4. Уҡыйҙар 5. Ашайым

10. Модаль һүҙҙәрҙе күрһәтегеҙ:

1. Ғәҙәттә, билдәле, күрәһең, бәлки, ихтимал
2. Тураһында, хаҡында, тарафынан, кеүек, өсөн
3. Әммә, ләкин, шуға күрә, һәм, шулай ҙа
4. Бик, үтә, ғәжәп, уғата, нәҡ, шаҡтай
5. Их, атаҡ-атаҡ, уф, эттәгенәһе,әйҙә

11. *Был турала белеүсе кеше булманы* һөйләмендә затһыҙ ҡылымды табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:

1. Исем ҡылым 2. Сифат ҡылым 3. Уртаҡ ҡылым
4. Хәл ҡылым 5. Ҡылым төркөмсәһенең береһенә лә ҡарамай

12. Билдәһеҙлек алмаштарын күрһәтегеҙ:

1. Ошо, был, теге, анау, бынау, бындай, тегендәй
2. Кем, нимә, ҡайҙа, нисә, нисек

3. Һәр кем, һәр нәмә, бөтәһе, һәммәһе

4. Минең, һинең, уның, минеке, һинеке, уныҡы

5. Әллә кем, теләһә нимә, кемдер, ҡайҙандыр

13. *Икенсе көн* һүҙбәйләнешенең төрөн билдәләгеҙ:

1. Ярашыу 2. Башҡарылыу 3. һөйкәлеү

4. Йәнәшәлек 5. Дөрөҫ яуап юҡ

14. *Йөҙәрләгән күҙҙәр Закирйәнгә төбәлгәйне* (Р.Низамов). Һөйләмдәге һандың төркөмсәһен билдәләгеҙ:

1. Тәртип һаны 2. Кәсер һаны 3. Йыйыу һаны

4. Бүлем һаны 5. Сама һаны

15. Түбәндәге һөйләмдә ниндәй тыныш билдәһе ҡуйырға кәрәк: *Күңелем һиҙеп тора (?) гармун моңо бер Аҡйондоҙ өсөн генә шулай һибелә* (М.К.)

1.Өтөр 2.Һыҙыҡ 3.Ике нөктә

4.Нөктәле өтөр 5.Тыныш билдәһе кәрәкмәй

**Вариант В**

**1**. *Ҡайҙалыр яҡында ғына трактор йөрөгән, аттар кешнәгән, һыйырҙар мөңрәгән, эттәр һаулаған тауыштар ишетелә (Ғ.Ғүмәр).* Һөйләмдең төрөн билдәләргә:

1.Шарт эйәрсәнле эйәртеүле ҡушма һөйләм

2.Тиң эйәрсәнле ҡушма һөйләм

3.Тиң булмаған эйәрсәнле ҡушма һөйләм

4.Ҡатнаш ҡушма һөйләм

5. Дөрөҫ яуап юҡ

2. *Аҡселән өҫтөндә таң тантана итә, ҡоштар һайраша, аҡһыл күк томан күтәрелә, тотош офоҡ киң ҡыҙыл байраҡ тартҡан һымаҡ алһыуланып яҡтыра бара, иртәнге тынлыҡты ярып, тракторҙар эшкә тотона* (Б.Б.). Был ҡушма һөйләм нисә ябай һөйләмдән төҙөлгән?

1. Ике 2. Өс 3. Дүрт 4. Биш 5. Алты

3. Баш һәм эйәрсән һөйләмдәр араһында һыҙыҡ ҡуйылған осраҡты билдәләргә:

1. Разия ханымдың (?) "Атайығыҙ йоҡлай", - тигән кисәтеүе етә

2. Кем аҡыллыраҡ (?) шул пирамиданың башына менеп ултыра

3. Балалар аталы көйө тилмереп йәшәмәһен (?) теләгем шул

4. Сентябрь тыуыуға ҡарамаҫтан (?) һауа ғәжәп йылы

5. Дөрөҫ яуап юҡ

4. *Был посылка кемдән, Вәлимә?* (С.Агиш).Төҙөлөшө буйынса был ниндәй һөйләм?

1. Ике составлы һөйләм, тарҡау, ябай

2. Кәм һөйләм

3. Ҡушма һөйләм

4. Ике составлы һөйләм, йыйнаҡ, ябай

5. Бер составлы һөйләм, тарҡау, ябай

5. *Тыуған ерен <u>белмәүсенән</u> Тыуған илен һорама* һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һөйләм киҫәге булып килгән?

1. Эйә 2. Хәбәр 3. Аныҡлаусы

4. Тултырыусы 5. Хәл

6.*Кемдәрҙе ҡайҙа алып китмәгән дә кемдәрҙең яҙмышын кемдәр менән тоташтырмаған был юлдар?(И.Ғиззәтуллин).* Һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ:

1. Хәбәр һөйләм 2. Бойороҡ һөйләм 3. Һорау һөйләм

4. Өндәү һөйләм 5. Риторик һорау һөйләм

7. *Башҡортостанда ҡарағай, ҡарағас, шыршы, ҡайын, имән, саған, йүкә, йыла, ҡарама һәм башҡа ағастар үҫә.* Был һөйләмдәге тиң киҫәктәрҙең төрөн билдәләгеҙ:

1. Эйә 2. Хәбәр 3. Аныҡлаусы

4. Тултырыусы 5. Хәл

8. *Ат аунаған ерҙә төк ҡала* һөйләмендә урын эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә бәйләнеү юлын күрһәтегеҙ:

1. Мөнәсәбәт һүҙ менән 2. Хәл ҡылым ярҙамында

3. Ерҙә һүҙе менән 4. Был эйәртеүле ҡушма һөйләм түгел

5. Интонация ярҙамында

9. Түбәндәге һөйләмдә ниндәй тыныш билдәһе ҡуйырға кәрәк: *Күңел ни ҡушһа (?) ҡул шуны башҡара* (М.Кәрим).

1. Өтөр 2. Һыҙыҡ 3. Ике нөктә

4. Нөктәле өтөр 5. Тыныш билдәһе кәрәкмәй

10. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдә, ябай һөйләмдәр бер-береһе менән ниндәй бәйләнештә тора икәнен асыҡлағыҙ: *Уҡытыусы сағында ошо ниәтен бойомға ашыра алманы: һәйкәл өсөн аҡса табылманы, музей өсөн бина булманы* (Б. Рафиҡов).

1. һанап китеү 2. Ҡаршы ҡуйыу 3. Дөйөмләштереү

4. Икенсеһенең мәғәнәһен асыҡлау 5. Икенсеһенең мәғәнәһен тултырыу

**Вариант С**

1. *Әсәһе ҡараһыу-зәңгәр бәрхәткә теҙеүле ҡашмауын да һандыҡ төбөнән алып кейҙергәс, Мәликә бығаса Ҡуштирәктә һис кем күрмәгән, һис кем белмәгән илаһиә затҡа әүерелде лә ҡуйҙы* (Ә.Хәкимов). Тиң булмаған эйәрсән һөйләмле ҡушма һөйләмдең составында ниндәй ябай һөйләмдәр бирелгән:

1. Баш һөйләм, ике сәбәп һөйләм һәм аныҡлаусы һөйләм

2. Баш һөйләм, ике тултырыусы һөйләм һәм сәбәп һөйләм

3. Баш һөйләм, эйә һөйләм һәм ике аныҡлаусы һөйләм

4. Баш һөйләм, сәбәп һөйләм һәм ике аныҡлаусы һөйләм

5. Баш һөйләм, сәбәп һөйләм һәм аныҡлаусы һөйләм

2. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләм составындағы эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеү сараларын асыҡлағыҙ:

*Йөктәге утындар тарҡалмаһын, улар берәмләп төшөп ҡалмаһын өсөн, улым, уларҙы башта уҡ бәйләп, борғослап сығырға кәрәк ине* (И.Ғиззәтуллин).

1. Килеш ялғауҙары ярҙамында3.Бәйләүес ярҙамында

2. Хәл ҡылым ялғауҙары ярҙамында 4.Теркәүес ярҙамында

5. Мөнәсәбәт һүҙ ярҙамында

3. Күп эйәрсәнле һөйләмдәрҙең ҡайһыһында эйәрсән һөйләмдәр үҙ-ара тиң булып килгән?

1. Барыһы ла Юлай һөйләгәнсә булһа, ниндәй матур, рәхәт тормош ҡороласаҡ (С.Мифтахов).

2. Кем ҡайһы ҡиәфәттә ултырһа, шул килеш бөтәһе лә, йылан арбағандай, ҡатып ҡалды (Ә.Хәкимов).

3. Ауылда атыш башланғас та, бер тауыштан көслө итеп "ура" ҡысҡырһағыҙ, шул еткән (Ә.Чаныш).

4. Беҙҙең һиңә иң ҙур кәңәш шул: кеше һине ҡәҙер итһен, тиһәң, иң элек һин үҙең кеше бул (Н.Иҙелбай).

5. Дөрөҫ яуап юҡ

4. Сәбәп эйәрсән һөйләмле эйәртеүле ҡушма һөйләмде күрһәтегеҙ:

1.Мин ҡайҙа барһам, һин шунда көтөп тораһың (И.Абдуллин).

2.Ҡояш сығыуға, ҡапҡа төбөндә мәхшәр ҡайнай ине (М.Кәрим).

3.Тормош хәүефле булғанға күрә, кәләш алырға уйламай торғандыр Хисмәтулла (Я.Хамматов).

4.Аҡман-тоҡман баҫылғас та, ҡыш сигенде (Я.Хамматов).

5.Мин шулай уйлайым: кеше бәхетенә кермә, боҙма (Ғ.Ғүмәр).

5. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмде күрһәтегеҙ:

1. Ураҡ урмаҡ – уйнамаҡ, бесән сапмаҡ – йән сапмаҡ (Мәҡәл).

2. Батша һалдаттары был урманды нисәмә тапҡыр һөҙөп сыҡкан, әммә Хәбир батыр табылмаған (З.Биишева).

3. Таныш моңдоң, бәлки, меңенсе ҡат
Яңғырауы булыр ошо йыр (М.Кәрим).

4. Ауыл матурланғандан-матурланды, колхоз көсәйгәндән-көсәйҙе (Ғ.Ибраһимов).

5. Миңә рәхәт, миңә еңел, бөтәһе лә шундай асыҡ (М.Кәрим).

## ДӨЙӨМ КУРСТЫ ҠАБАТЛАУ ӨСӨН ТЕСТАР

### Вариант А

1. Башҡорт алфавиты ниндәй графика нигеҙендә төҙөлгән?

А. Латин графикаһы Б. Ғәрәп графикаһы

В. Урыҫ графикаһы (кириллица) Г. Грек графикаһы

2. Түбәндә бирелгән һүҙҙәр араһынан хәрефтәр һаны өндәр һаны менән тап килгән һүҙҙе билдәләгеҙ:

А. Емеш Б. Яулыҡ В. Еләк

Г. Аҡъяр Д. Юрғашты

3. Һуҙынҡы өндән башланған һүҙҙе күрһәтегеҙ:

А. Юлдаш Б. Ямғыр В. Еләк

Г. Йәйғор Д. Урман

4.Түбәндәге һүҙҙәр араһынан сингармонизм законына буйһонмаған һүҙҙе табығыҙ:

А. Полкты Б. Ҡошсолоҡ В. Тормоштоң

Г. Өйҙө Д. Төҙөлөштөң

5. *Сания Әхәт ҡыҙы Абдуллина профессияһы буйынса - укытыусы.* Һөйләмдең хәбәрен табып, уның ниндәй һүҙ төркөмөнән килгәнен билдәләгеҙ:

А. Исем Б. Сифат В. Һан

Г. Ҡылым Д. Рәүеш

6. *Айырылғанды айыу ашар.* Мәҡәлдә тәүге һүҙ һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килеүен билдәләгеҙ:

А. Эйә Б. Хәбәр В. Тултырыусы

Г. Аныҡлаусы Д. Хәл

7. *Һөйләшер һүҙ күп әле.* Был һөйләмдә сифат ҡылым ниндәй заманды белдерә:

А. Хәҙерге заман сифат ҡылым

Б. Үткән заман сифат ҡылым

В. Киләсәк заман сифат ҡылым

Г. Шаһитлы үткән заман

Д. Билдәһеҙ киләсәк заман

8. *Ошо ергә былтыр ҙа еләккә килгәйнек.* Был һөйләмдә алмашты табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:

А. Зат алмашы Б. Күрһәтеү алмашы

В. Һорау алмашы Г. Юҡлыҡ алмашы

Д. Билдәһеҙлек алмашы

9. Ҡайһы һүҙ бер генә ижектән тора:

А. Алтынсы Б. Ауыл В. Тау

Г. Етен Д. Ғилем

10. Һаңғырау тартынҡынан башланған һүҙҙе табығыҙ:

А. Башҡортостан Б. Ҙур В. Ғалим

Г. Ҡарындаш Д. Заман

11. *Ап- аҡ, ифрат матур* сифаттары ниндәй дәрәжәлә?

А. Төп дәрәжәлә Б. Сағыштырыу дәрәжәһе

В. Артыҡлыҡ дәрәжәһе Г. Аҙытыу дәрәжәһе

Д. Дәрәжәһе юҡ

12. Ҡағиҙә буйынса дөрөҫ яҙылған һүҙҙе күрһәтегеҙ:
А. Киоскта Б. Юристҡа В. Классты
Г. Металдан Д. Лозунгты
13. Һандарҙа ялғауҙарҙың яҙылышы ҡағиҙәгә тап килгән һүҙҙе күрһәтегеҙ:
А. 23-сө апрель Б. 1950-се йыл
В. 1-се һанлы интернат –мәктәп Г. 12-нсе рәт
Д. XX –се быуат
14. *Уларға бары дөрөҫөн генә әйтһендәр.* Был һөйләмдә ҡылымды табып, уның һөйкәлешен билдәләгеҙ:
А. Хәбәр һөйкәлеше Б. Бойороҡ һөйкәлеше
В. Теләк һөйкәлеше Г. Шарт һөйкәлеше
Д. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше
15. Ҡайһы һүҙҙең бүленеше юлдан юлға күсереү ҡағиҙәһенә тап килгән:
А. А-тайҙы Б. Йыл-ъяҙма В. Йә-йғор
Г. Ауылдаш-тар Д. Ҡыу-аҡ
16. Урыҫ теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың яҙылышы дөрөҫ булған һүҙҙе күрһәтегеҙ:
А. Сентяберҙә Б. Автомобильдә
В. Шампуньды Г. Класста Д. Поезда
17. *Башҡортмон* һүҙендә ниндәй категория ялғауы бар?
А. Эйәлек заты ялғауы Б. Хәбәрлек заты ялғауы
В. Килеш ялғауы Г. Күплек ялғауы Д. Ялғау юҡ
18. Ҡайһы һүҙҙең яҙылышы дөрөҫ:
А. Көньяҡ Б. Гөльемеш В. Аҡъюлов
Г. Байъегет Д. Аҡъегет
19. Тик үҙгәртеүсе ялғауҙар ғына ҡабул иткән һүҙҙәр бирелгән юлды күрһәтегеҙ:
А. Юлсы, юлһыҙ, юлдаш Б. Эшсе, эшсән, эштә, эшләү
В. Иректе, иректән, ireккә, иректең Г. Ташсы, ташлы, ташһыҙ
Д. Елкәй, елһеҙ, елләтеү
20. *Йығылыу, тәгәрәү, ҡолау, ауыу һүҙҙәрен* мәғәнәләре буйынса нисек атап була?
А. Синонимдар Б. Антонимдар
В. Омонимдар Г. Омографтар Д. Омофондар
21. *Ҙур – бәләкәй, ауыр – еңел* һүҙҙәре мәғәнәләре буйынса нисек атала?
А. Синонимдар Б. Антонимдар
В. Омонимдар Г. Омографтар Д. Омофондар
22. *Батыр бер үлер, ҡурҡаҡ ҡырҡ үлер.* Мәҡәлендә икенсе һүҙҙең һөйләмдә ниндәй хәл икәнлеген билдәләгеҙ:
А. Рәүеш хәле Б. Ваҡыт хәле В. Кире хәл
Г. Шарт хәле Д. Күләм-дәрәжә хәле
23. *Аҡ алъяпҡыс быуҙым да,*
*Ҡулдарымды йыуҙым да*
*Ваҡ бәлештәр бешерҙем...* (К.Кинйәбулатова).
Был һөйләмдәге исемдәр һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килгән?
А. Эйә Б. Хәбәр В. Тултырыусы
Г. Аныҡлаусы Д. Хәл
24. Һөйләмдәге тиң киҫәктәрҙең төрөн билдәләгеҙ: Ниңә һуң үҙең мине түҙергә, сыҙарға, күнегергә, көтөргә өгөтләйһең?
А. Тиң эйәләр Б. Тиң хәбәрҙәр
В. Тиң тултырыусылар Г. Тиң аныҡлаусылар Д. Тиң хәлдәр
25. Яңғыҙлыҡ исмедәрҙең ҡайһыһында ялғауҙар дөрөҫ яҙылған.
А. Бресткә Б. Кирилды В. Донбасста
Г. Томскиҙә Д. Шмидте

26. *Ул университетҡа уҡырға быйыл инде.* Һөйләмдә рәүеште табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:
А. Урын рәүеше Б. Төп рәүеш
В. Күләм-дәрәжә рәүеше Г. Ваҡыт рәүеше Д. Оҡшашлыҡ рәүеше
27. Исемгә хас грамматик категорияны билдәләгеҙ:
А. Заман Б. Дәрәжә В. Килеш
Г. Йүнәлеш Д. Һөйкәлеш
28. *Күк йөҙөндә яҙғы ҡояш балҡый.* Һөйләмдәге өсөнсө һүҙҙең ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарауын билдәләгеҙ:
А. Исем Б. Сифат В. Һан
Г. Ҡылым Д. Рәүеш
29. *Был турала белеүсе кеше булманы.* Һөйләмдә ҡылымды табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:
А. Исем ҡылым Б. Хәл ҡылым
В. Уртаҡ ҡылым Г. Сифат ҡылым Д. һөйләмдә ҡылым юҡ
30. *Баланың китабы* һүҙбәйләнешенең төрөн билдәләгеҙ:
А. Ярашыу Б. Башҡарылыу В. Һөйкәлеү
Г. Йәнәшәлек Д. Дөрөҫ яуап юҡ
31. *Һыбайлылар, юлға һыйыша алмай, юл эргәһендәге сиҙәмлектән киләләр ине.* Һөйләмдә эйәне табып, уның ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен билдәләгеҙ:
А. Исемдән Б. Сифаттан В. Алмаштан
Г. Исем ҡылымдан Д. Сифат ҡылымдан
32. *Ул һайрай мең телдә, булғанға күп илдә.* Һөйләмдә хәлде табып, уның төрөн билдәләгеҙ:
А. Рәүеш хәле Б. Ваҡыт хәле В. Кире хәл
Г. Шарт хәле Д. Күләм-дәрәжә хәле
33. *Үҙем генә беләм юлдар бикле*
*Уҙғандарға кире ҡайтырға...* (Р.Бикбаев). Һөйләмдә ниндәй тыныш билдәһе ҡуйырға кәрәк:
А. Өтөр Б. Һыҙыҡ В. Нөктәле өтөр
Г. Ике нөктә Д. Тырнаҡ
34. *Йәнғол кеҫәһенән махорка сығарып төрөргә булғайны – ҡағыҙы булмай сыкты.* (Һ. Дәүләтшина). Был теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдә ябай һөйләмдәр бер-береһе менән ниндәй мәғәнә мөнәсәбәтендә тора?
А. Һанап китеү Б. Ҡаршы ҡуйыу В. Дөйөмләштереү
Г. Икенсеһенең мәғәнәһен асыҡлау Д. Икенсеһенең мәғәнәһен тултырыу
35. *Үҙең теләп кейгән ҡамытың муйыныңды ҡырмаһын.* Эйәрсән һөйләмде табып, уның төрөн билдәләгеҙ:
А. Тултырыусы һөйләм Б. Аныҡлаусы һөйләм
В. Хәл һөйләм Г. Эйә һөйләм Д. Хәбәр һөйләм
36. *Ә, ләкин, әммә, тик, шуға ҡарамаҫтан.* Теркәүестәрҙең төрөн билдәләгеҙ:
А. Бүлеү теркәүестәре Б.Һығымта теркәүестәре
В. Йыйыу теркәүестәре Г.Ҡабатлау теркәүестәре
Д. Ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре
37. *Әсәйем – уҡытыусы, атайым – инженер.* Был һөйләмдә һыҙыҡтың ҡуйылышы ҡайһы ҡағиҙә менән аңлатыла?
А. Дөйөмләштереүсе һүҙ алдында ҡуйылған.
Б. Баш һөйләм менән эйәрсән һөйләм араһында ҡуйылған.
В. Инеш һүҙҙе айырыу өсөн ҡуйылған.
Г. Бер үк һүҙ төркөмөнән килгән эйә менән хәбәр араһында ҡуйылған.
Д. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр араһында ҡуйылған.

38. *Польшала, Венгрияла, Германияла гасролдә йөрөп ҡайттыҡ.* Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ:

А. Билдәле эйәле һөйләм Б. Билдәһеҙ эйәле һөйләм

В. Атама һөйләм Г. Эйәһеҙ һөйләм Д. Дөйөм эйәле һөйләм

39. Күләм-дәрәжә эйәрсән һөйләмле эйәртеүле ҡушма һөйләмде табығыҙ:

А. Кеше ни тиклем күберәк тел белһә, уның культура кимәле лә шул тиклем юғарыраҡ.

Б. Ҡайҙа йәштәр, шунда шаян һүҙ, шау-шыу, уйын-көлкө

В. Кем эшләмәй, шул ашамай

Г. Йәҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын.

Д. Килбәте ниндәй – күләгәһе шундай.

40. *Хәҙер, Аллаға шөкөр, донъя тыныс*. Был һөйләмдә сифат һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килгән?

А. Эйә Б. Хәбәр В. Тултырыусы

Г. Аныҡлаусы Д. Хәл

**Вариант В**

1. Яңғырау тартынҡынан башланған һүҙҙе күрһәтегеҙ:

А. Сәғәт Б. Фатима В. Яҡташ Г. Шарлауыҡ Д. Цифр

2. Ҡайһы һүҙҙә ялғау дөрөҫ яҙылмаған:

А. Ноябрҙа Б. Билеттар В. Календарҙы Г. Июндә Д. Слесарҙы

3. Ҡайһы һүҙҙә орфоэпик ҡағиҙәнең боҙолоуы күҙәтелә:

А. [баБай] В. [уаҡыт] С. [балыҡ] D. [ялБыр] F. [кибә]

4. Дөрөҫ яҙылмаған һүҙҙе билдәләгеҙ:

А. Гөльямал В.Ашъяулыҡ С. Тәьҫир D. Йөрьәт F. Аҡъюл

5. Баҫым дөрөҫ ҡуйылмаған һүҙҙәр төркөмөн билдәләгеҙ:

а. барһЫн, килһЕн, йәшәһЕн, илаһЫн
б. сӨнки, фӘҡәт, гӘрсә, йӘнә
в. уҡыйбЫҙ, яҙаһығЫҙ, эшләйЕм
г. урмандА, өйҙӘ, эштӘ, ҡалалА
д. бАрсы, эшлӘйсе, һөйлӘйсе

6. Ябыҡ ижектәрҙән генә торған һүҙҙе билдәләгеҙ:

А. СәләмБ. Ауыл В. Китап Г. Ҡапҡас Д. Һөйләүсе

7. Ижектәргә дөрөҫ бүленмәгән һүҙҙе күрһәтегеҙ:

А. Хә-реф Б. Ҡуль-яҙ-ма В. Са-ма-уыр Г. Бу-яу Д. Тә-ьмин

8. Тел фәненең ниндәй бүлеге телдең дөрөҫ әйтелешен өйрәнә:

А.фонетика Б.Лексикология В. Орфоэпия Г.Орфография Д. Пунктуация

9. Дөрөҫ ялғау ҡабул иткән һүҙҙе күрһәтегеҙ:

А.Боролошто Б. Көсөктең В. Һонторҙы Г. Ҡолондың Д. Төрөкте

10. «Һалҡын» күҙе ҡайһы осраҡта күсмә мәғәнәлә ҡулланылған:

А.Һалҡын ҡараш Б.Һалҡын һыу В. Һалҡын көн

Г.Һалҡын ҡыш Д. Иртәнге һалҡын

11. *Аҡыллыға серем систем −*
*Үҙе теләп улы итте;*
*Бер ... серем систем −*
*Теләмәҫтән ҡоло итте.* (М. Кәрим)

Күп нөктәләр урынына нимә ҡулланырһығыҙ:

А.СинонимБ.Антоним В. Омоним

12. Төп башҡорт һүҙҙәрен күрһәтегеҙ:

а. Мосафир, нәтижә, фәҡәт, ғөмүми
б. Ҡар, көн, болот, ҡорот, баш

в. Мейес, эшләпә, дегет, ситса
г. Телефон, гравюра, телеграф
д. Хәүеф, хәрәкәт, мөхәббәт
13. Ҡайһы юлда диалектизмдар бирелгән:
а. Айырым, бергә
б. Ҡыҙҙар, ҡыҫтар, ҡыҙлар
в. Аршын, хан, социализм, сажин
г. Бағыу, ейеү, шәкерт, һабаҡ
д. Брокер, купон, мораторий
14. Ҡайһы фразеологик берәмек *өндәшмәү* мәғәнәһен бирә:
А. Ауыҙға йөҙөк йәшереү Б. Ауыҙ бешеү В. Ауыҙ йырыу
Г. Ауыҙҙан ут сәсеү Д. Ауыҙын ябыу
15. Ҡылым, уртаҡ ҡылым, ҡушма ҡылым, юҡлыҡ. Ҡайһы һүҙ бирелгән грамматик мәғәнәгә эйә:
А. Барырға кәрәк Б.Уҡымаған булған В. Кисмәү
Г. Төҙөмәҫкә ине Д.Яратҡан булған
16. Тик яһаусы ялғауҙар ҡабул иткән тамырҙаш һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ:
А. Яуҙаш, яусыл, яугир
Б. Уҡыу, уҡыусы, уҡытыусы, уҡыусымын
В. Кластан, класташ, класһыҙ
Г. Урманлы, урмансы, урмандан
Д. Баламын, балам, балаһығыҙ
17. Парлы һәм ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылған төркөмөн билдәләгеҙ:
а. Ҡара диңгеҙ, йырлай-йырлай, асыҡ һары, Үрге Мораҡ
б. «Урал» колхозы, «Салауат» исемендәге колхоз, Ваҡыт-ваҡыт
в. Сәй-шәкәр, ҡул-яҙма, көскә-көскә
г. Ағза корреспондент, Өфө-Ҡазан самолеты, илке-һалҡы
д. Быйыл, ҡараҡош, Ағиҙел, «Ватандаш» журналы
18. Ҡайһы һүҙгә ялғау дөрөҫ ҡушылмаған:
А. Приискының Б. Металға В. Поезға Г. Танкының Д. Августҡа
19. Ҡылым ниндәй грамматик категориялар менән үҙгәрә:
А. Һөйкәлеш, заман, зат, һан, килеш, йүнәлеш, күләм
Б. Һөйкәлеш, заман, зат, һан, йүнәлеш, дәрәжә
В. Һөйкәлеш, заман, зат, һан, барлыҡ-юҡлыҡ, йүнәлеш, күләм
Г. Заман, зат, һан, дәрәжә, йүнәлеш, күләм
Д. Һөйкәлеш, заман, зат, барлыҡ-юҡлыҡ, һан, килеш, йүнәлеш
20. Берлек мәғәнәһен аңлатҡан исемде табығыҙ:
а. Ағиҙелкәйҙәрҙе аша сыҡтым ... (Халыҡ йыры)
б. Салауаттар тыуыр әле тағы ла.
в. Апайымдар беҙгә килә.
г. Ағастар йәшелләнә.
д. Йондоҙҙарға осоп етәһе.
21. *Өй башы – күҙәтеү өсөн иң ҡулай урын.*
Аҫтына һыҙылған исемдең килешен билдәләгеҙ:
А. Төп килеш Б. Эйәлек килеш В. Төбәү килеш
Г. Төшөм килеш Д. Урын-ваҡыт килеш
22. *Һинең янда һәр саҡ шатмын, илгәҙәкмен,*
*Осоп төшәм –* елбәҙәкмен.
Аҫтына һыҙылған һүҙҙең затын билдәлә:
А. I эйәлек заты Б. II эйәлек заты В. III эйәлек заты
Г. I хәбәрлек заты Д. II хәбәрлек заты.
23. Төп сифатты билдәләгеҙ:

А. Оялсан бала Б. Йәйге көн В. Еҙ батмус

Г. Ситса күлдәк Д. Иртәнге томан

24. *Бирәүҙән*икәү яҡшы, икәүҙән өсәү яҡшы.

Аҫтына һыҙылған һандың төркөмсәһен билдәлә:

А. төп һан Б. Рәт һаны В. бүлем һаны Г. самаһаны Д. йыйыу һаны

25. Ҡайһы һандың яҙылышы ҡағиҙәгә тап килмәй:

А. 7-се рәтБ. 1998-1999 уҡыуйылы В. 5-се синыф

Г. 9-10 йылД. 10-лаған һорау

26. *Һәм беләм, һинең ҡыҙың да,*

*Минеке кеүек, матур,*

*Шулай бит: һәр ата өсөн*

*Үҙ ҡыҙы була алтын. (Р. Ниғмәти)*

Күрһәтелгән алмаштың төркөмсәһен билдәләгеҙ:

А. Зат алмашы Б. Күрһәтеү алмашы В. Һорау алмашы

Г. Билдәләү алмашыД. Эйәлек алмашы

27. Хәҙерге заман хәл ҡылым ҡулланылған һөйләмде табығыҙ:

А. *Бәхетле Һәм мул тормошҡа өлгәшеү өсөн әле күп көс* һалырға *кәрәк ине.*

Б. Бөгөнгө көндә ҡаҙ өмәһе байытылып, төрлө биҙәктәргә биҙәлеп, ауыл хаҡыныңкүңелле байрамдарының береһенә әүерелде.

В. Иманһыҙлыҡ – был донъяла

Әсә телен һанға һуҡмау. (Р. Мифтахов)

Г. Тарихты белмәй үҫкән бала бөгөнгө тормошҡа баһа бирә алмаясаҡ.

Д. Ҡатын-ҡыҙҙың йорт усағын һәр саҡ утлы тотоусыбулыуына күнеккәнбеҙ.

28. Йөкмәтеү йүнәлешендә тороусы ҡылымды күрһәт:

А.Хат яҙҙырБ. Мал ҡараштыВ.Матурбиҙәлде

Г. Табипҡа күрен Д. Тырышып эшлә

29. Ҡушма рәүеште билдәлә:

А.Бөгөн Б. Шәп В. Ҡышын Г. Ҡутарғансы Д. Шунлыҡтан

30. *Сабый саҡта ниндәй бала үҙенә күберәк иғтибар биреүҙе теләмәй* ҙә *иркәләнергә яратмай икән?*

Аҫтына һыҙылған һүҙҙең ниндәй һүҙ төркөмө булыуын билдәлә:

А. Теркәүес Б. Киҫәксә В. Бәйләүес Г. Ымлыҡ Д. Алмаш

31. Эйәртеүсе һүҙ менән эйәреүсе һүҙ араһында һөйкәлеү бәйләнеше булған һүҙбәйләнеште табығыҙ:

А. Ағиҙел буйы Б. Һағыштарыма үлсәү булды

В. Азаттың тубы Г. Ҡанатымды ҡайырҙы Д. Беҙ тапшырабыҙ

32. Ҡайһы һөйләмдә тура тултырыусы ҡулланылған:

А. Яҙ еткәс, тирә-яҡты ҡыйҙан таҙартабыҙ.

Б. 8 март байрамына әсәйемә бик матур бүләк әҙерләнем.

В. Уралҡайҙан бейек, ай, тау булмаҫ. (Йырҙан)

Г. Юрамалунынтураһындаяманхәбәртаратҡан.

Д. Һүҙҙәюҡ, беҙ–Рәсиянынберөлөшө, ләкинбылхәлпайтәхеткәил-еребеҙҙәтеләһәниндәйбаш-баштаҡлыҡҡылырғатигәндеаңлатмай. (Б. Рафиҡов)

33. *Әгәр миңә* ышанаһың икән –

*Бер ҡасан да минең турала*

*Теләһә ниндәй үткенсенән һорап,*

*Яҙмышымды хата юрама. (Р. Ғарипов)*

Билдәләнгән һүҙ ниндәй һөйләм киҫәге булып тора:

А. Хәбәр Б. Тултырыусы В. Аныҡлаусы

Г. Сәбәп хәле Д. Шарт хәле

34. Ике составлы һөйләмде табығыҙ:

А. Өфөнән, талантлар табыу ниәте менән, музыка училищеһының

беруҡтыусыһы Йомағужа урта мәктәбенә килеп төштө. (Ф.Рәхимғолова)

Б. Мөхәббәт тигән нәмәне ниндәйҙер алдан уйланған пландар ҡыҫымына буйһондороп буламы ни? (М. Хәйҙәров)

В. Бер генө бөртөк орлоҡто ла яр өҫтөндә ҡалдырмаҫҡа, әрәм-шәрәм итмәҫкә! (Б. Ишемғолов)

Г. Йәйә бөктөрөргә кәрәк! (К. Мәргән)

Д. Бына баҡса ултырттыҡ, киләһе йыл килгәндә үҙеңде алма, ҡарағаттар менән һыйларбыҙ. (А. Таһиров)

35. Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ:

*Бер ҡыйыуға мең ҡурҡаҡты ла алмаштырмайҙар. (Мәҡәл)*

А. Билдәле эйәле һөйләм
Б. Билдәһеҙ эйәле һөйләм
В. Дөйөм эйәле һөйләм
Г. Эйәһеҙ һөйләм
Д. Атама һөйләм

36. Тиң киҫәктәрҙе табып, ниндәй һөйләм киҫәктәре булыуҙарын асыҡлағыҙ: *Менәүәрә бына өсөнсө йыл инде клуб мөдире һәм китапханасы булыпэшләй ине.* (Н. Мусин)

А Тиң эйәләр Б. Тиңхәбәрҙәр В. Тиң аныҡлаусылар
Г. Тиң тултырыусылар Д. Тиң хәлдәр

37. Һөйләмдә һыҙыҡ ҡуйылышы ниндәй ҡағиҙә менән аңлатыла:

*Малай сакта Усманды бөтә нәмә лә – айҙағы көйәнтәле ҡыҙ ҙа, күктәге һанап бөткөһөҙ йондоҙҙар ҙа, буйға һыҙғылаған йәшен дә ҡыҙыҡһындыра ине.*(«Аманат» журналынан)

А. Баш һөйләм менән хәбәр эйәрсән һөйләм араһында;
Б. Тиң киҫәктәрҙән һуң килгән дөйөмләштереүсе һүҙ алдынан;
В. Дөйөмләштереүсе һүҙ һуңында һаналып киткән тиң киҫәктәр алдынан;
Г. Теҙмә ҡушма һөйләм составындағы ябай һөйләмдәр араһында.
Д. Баш һөйләм менән тултырыусы һөйләм араһында.

38. Өтөрҙәрҙең ҡуйылышын аңлатығыҙ:

*Шул ваҡыт, әмәлгә ҡаршы, рота командиры килеп сыҡты бит.*(Ғ. Ибраһимов)

А. Өндәш күҙ эргәһендә;
Б. Айырымланған хәл әйтеме;
В. Инеш һүҙ эргәһендә;
Г. Тиң киҫәктәр араһында;
Д. Инеш һүҙбәйләнеш эргәһендә.

39. *Ысынлап та, бөгөн ҡатынының, Айһылыуҙың, төҫөндә ризаһыҙлыҡ, тауышында һүҙ көрәштерергә әҙерлек күренә ине.* (З. Биишева)

Айырымланған һөйләм киҫәгенең төрөн билдәләгеҙ:

А. Айырымланған аныҡлаусы
Б. Айырымланған өҫтәлмәлек
В. Айырымланған тултырыусы
Г. Айырымланған ваҡыт хәле
Д. Айырымланған рәүеш хәле

40. Килтерелгән өҙөк ниндәй стилдә яҙылған:

*Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондарында сармат дәүеренә ҡараған өсөнсө төр археологик ҡомартҡылар бар. 1964 йылғы археологик экспедиция Салауат районы Торналы ауылы эргәһендә Ҡалатау тип аталған тарихи урынды тикшерҙе. Үткәрелгән ҡаҙыныуҙар ул урынға Ҡалатау тип юҡҡа ғына исем бирелмәгәнлеген асыҡланы.* (Н. Мәжитов)

А. Йәнле һөйләү стиле Б. Матур әҙәбиәт стиле В. Фәнни стиль
Г. Публицистик стиль Д. Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле.

41. *Төрлө кире тойғо-кисерештәр(?) ҡайғы, ҡурҡыу, кәмһенеү, ярһыу(?) былар*

*бөтәһе лә йөрәктең ҡан тамырҙарын туҙҙыра.*(«Башҡортостан ҡыҙы» журналынан). Һорауҙар урынына тейешле тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ:

а. Өтөр менән һыҙыҡ

б. Парлы һыҙыҡ

в. Ике нөктә менән һыҙыҡ

г. Һыҙыҡ менән ике нөктә

д. Парлы ике нөктә

42. Ҡушма һөйләм составындағы һөйләмдәр араһында өтөр ҡуйылышынаңлатығыҙ:

*Һуңғы йылдарҙа республикалағы йылғалар менән күлдәр нык һайыҡты, хатта Ағиҙел, Дим, Һаҡмар, Ашҡаҙар, Яйыҡ, Ыҡ, Төйәләҫ, Эйек кеүек ҙур йылғаларҙың да һыуы кәмене. («Башҡортостан» гәзитәһынан)*

а. Һығымта яһаусы теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдә.

б. Ҡаршы ҡуйыу теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдә.

в. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәге баш һөйләм менән сәбәп һөйләм араһында.

г. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәге баш һөйләм менән тултырыусы һөйләм араһында.

д. Бүлеү теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдә.

43. Эйә һөйләмле эйәртеүле ҡушма һөйләмде табығыҙ;

А. Үҙегеҙгә мәғлүм: Муса Мортазин бригадаһы Уральск фронтында Дутов бандаларына ҡаршы яңынан үлемесле һуғышҡа ташланды. (Ф. Иҫәнғолов)

Б. Тальян гармун байрамының тағы ла бер әһәмиәте шунда: ул халыҡ ижадын пропагандалай, художестволы ижадтың жанрҙарын байыта, уның яңынан-яңы мөмкинлектәрен аса. («Агиҙел» журналынан)

В. Йомабай Иҫәнбаев Европа илдәрендә булғанда концертты ниндәй көй менән башлап ебәрһә, ул бында ла шул уҡ көйҙәрен ҡурайҙа уйнаны.(F. Сөләймәнов )

Г. Белә Ризуан: тәү ҡарашҡа баҫалҡы, йыуаш холоҡло Фәйзулла − алдына алғанын ҡуймай торған кеше. (Н. Мусин)

Д. Ҡалай китергә, ниндәй һылтау табырға − шул турала уйлай башланым. (Д. Юлтый)

44. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ:

*Совхозда эштәр ауырлашҡандан − ауырлаша бара: ирҙәрҙе генә түгел, ҡыҙҙарҙы ла һуғышҡа сүпләй башланылар. (Ш. Бикҡол)*

а. Хәбәр эйәрсән һөйләм

б. Тултырыусы һөйләм

в. Шарт һөйләм

г. Сәбәп һөйләм

д. Маҡсат һөйләм

45. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәнең төрөн билдәләгеҙ:

*Төн ни тиклем ҡараңғы булмаһын, поездар нн тиклем ҡыҙыулыҡ менән үтмәһендәр, ҡараңғылыҡты тишеп, төбәлеп ҡараған күҙҙәр вагон площадкалары өҫтөндә барған нәмәләрҙең шәүләләрен бик асыҡ айыралар.(С. Ҡудаш)*

а. Бер-бер артлы эйәреүсе эйәрсән һөйләмле ҡушма һөйләм

б. Тиң эйәрсән һөйләмле ҡушма һөйләм

в. Тиң булмаған эйәрсән һөйләмле ҡушма һөйләм

г. Ҡатнаш ҡушма һөйләм

д. Теҙем

46. *Барған Һуҡмағың упҡынға илткән икән,*

